✓ *Һүҙҙəрегеҙҙе бушҡа əрəм итмəгеҙ. Һүҙҙəр шул тиклем оло көскə эйə һəм улар емергес һəлəкəткə лə килтереүе мөмкин. Нимəлер һөйлəр алдынан үҙегеҙ телəгəн һүҙҙе теүəл, урынлы итеп əйтергə өйрəнегеҙ. Уйлағанығыҙҙы һөйлəргə, һөйлəйəсəк һүҙегеҙ тураһында уйларға өйрəнегеҙ. Ихлас һүҙ һөйлəп ихлас аралашыу - ул ҙур көс. Һəм бик һирəк осрай торған күренеш.*

**Робин ШАРМА.**

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

26 ИЮЛЬ-1 АВГУСТ (МАЙАЙ-УРАҒАЙ)
2014 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуға хаҡы ирекле

№30 (604)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Яҙыусылар бит...**

миллəт хəтере



3

**Кəсеп белгəн - бөлмəҫ**



6

**Мəңгелек боҙ илендə...**

асыл башҡорт балалары йəнде иретте



8-9

**Кеше ғүмере...**

Аллаһы Тəғəлə тарафынан һаҡлауға бирелгəн аманат



13

14 ТВ-программа

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Ниңə беҙҙең егеттəр футбол уйнамай?



***Ғайса ХӘЛИТОВ, Бөрйəн районы хакимиəтенең йəштəр сəйəсəте һəм спорт буйынса комитеты рəйесе, спорт мастерлығына кандидат, Башҡортостандың атҡаҙанған физик культура хеҙмəткəре:*** Уйнай ул беҙҙең егеттəр футболын да, хоккейын да, волейболын-башҡаһын да. Тик үҙ-ара, һəүəҫкəрҙəр кимəлендə. Ә бына уларҙың профессиональ кимəлгə барып етмəүе хаҡында минең күп уйланғаным, ошо фактты анализлағаным бар. Күрəһең, беҙҙең халыҡ менталитеты, милли-психологик һəм хатта ҡайһы бер физиологик үҙенсəлектəре буйынса Боронғо Грецияла уҡ билдəле булып, Англияла рəсмилəштерелгəн футбол уйынына ылығып китə алмай. Беҙҙə футболды уйнауға ҡарағанда ҡарарға күберəк яраталар. Беҙҙə генə түгел, ғөмүмəн, күпселек төрки халыҡтары араһында, шулай уҡ Азия илдəрендə лə был спорт төрө əллə ни ҙур популярлыҡ менəн файҙалана, тип əйтə алмаҫ инем. Һеҙҙең футбол уйнап йөрөгəн берəй яҡут йə бүрəт егетен күргəнегеҙ бармы? Шул-шул... Әле бына донъя беренселегендə көньяҡ кореялылар аренаға килеп сыҡты сығыуын. Беҙҙең халыҡ бит борондан ат өҫтөнəн төшмəгəн, яу сапҡан, бəйгелəрҙə ал бирмəгəн, көрəштə бил бирмəгəн. Беҙҙең егеттəрҙең фактураһы тип əйтəйемме, кəүҙə төҙөлөшө лə европалыларға ҡарағанда икенсерəк төрлө: бик буйсан булмаған, киң яурынлы баһадир егеттəр, əлбиттə, көрəш йə башҡа төр спортты үҙ итə. Бының менəн улар футбол йə хоккейҙа бөтөнлəй уйнамай, тип əйтмəйем, киреһенсə, яратып шөғөллəнəлəр. Республикабыҙ районларында футбол һəм хоккей командалары байтаҡ, лəкин улар күберəк үҙ ҡаҙанында ҡайнай. Урындарҙа был командаларҙы юғарыраҡ кимəлгə күтəрерҙəй янып торған ойоштороусылар, физкультура һəм спорт өлкəһендə махсус белемле профессионалдар, һəлəтле тренерҙар юҡ. Спорт ярыштарына йөрөй башлаһаң, һаман шул бер балыҡ башы - эш финанслауға килə лə төртөлə. Икенсенəн, футбол, ни генə тиһəң дə, асыҡ һауала үткəрелə торған (беҙҙең өсөн "йəйге") спорт төрө. Ә бит күнекмəлəр туҡтауһыҙ, йыл əйлəнəһенə алып барылырға тейеш.

***Артур БАТЫРШИН, "Киске Өфө" гəзитенең инженер-программисы:*** Спорт менəн бала саҡтан шөғөллəнə башлау ғына ниндəйҙер һөҙөмтə бирə, тигəн фекерҙəмен. Һəр хəлдə, минең əле булһа волейбол уйнарға əүəҫлек 5-се класта уҡығанда уҡ башланды. Ул саҡ мəктəбебеҙгə бик шəп бер тренер килде. Көн һайын дəрестəрҙəн һуң ул беҙҙең менəн күнекмəлəр үткəрə ине. Яңы ғына уйнай башлаған саҡтан уҡ профессиональ тренерҙың дөрөҫ йүнəлеш биреүе, уйнау техникаһын төшөндөрөп, дөрөҫ реакцияға өйрəтеүе, тəбиғи, оҫталыҡ һəм тəжрибə нигеҙен тəшкил итмəйенсə ҡалманы. Футбол уйнарға ла яраттыҡ, лəкин ҡыш уның өсөн шарттар юҡ, ə волейболды асыҡ һауала ла, спорт залдарында ла уйнарға була, шуға беҙ ошо спорт төрөн үҙ иткəнбеҙҙер ҙə. Икенсенəн, минең атай ҙа оҫта волейболсы, ваҡытында ул да ярайһы файҙалы кəңəштəрен биреп, тəжрибə уртаҡлашты. Бəлки, футбол менəн дə шөғөллəнеп китер инем, лəкин ул саҡ эргəмдə гел генə волейболсылар тура килеп, был ошо төр спортҡа ылығып китеүгə сəбəп булды. Ҡыҫҡаһы, балаларҙы спортҡа кесе йəштəн ылыҡтырып ҡына ниндəйҙер һөҙөмтəгə өмөт итергə була.

**(Дауамы 2-се биттə).**

*ШАҒИР ҺҮҘЕ*

## ТЕЛЕМ, ТИП ТАЛМАҪ ТЕЛЕМ...




Үҙ илендə ситкə тибелгəндə,
Ситтə булыр микəн һиңə һан?
Туған телем, йоҡоларым ҡаса
Һинең яҙмышыңды уйлаһам.

Ниндəй хəлгə һине төшөрмəйҙəр
Белмəгəндəр хатта əлепте.
Мəғəнəһе һүҙҙең үҙгəреүсəн
Дөрөҫ яҙмаһаң да хəрефте.

Алтаҡтаға сығаралар һине,
Шайтан бото һыныр, биллəһи.
Хаталарҙан хали түгел əҙəм
Үҙ-үҙенə ҡуя билдəне.

Миллəт һүҙен белмəй үҫһендəр тип,
Ырғытылды алып паспорттан.
Нисə быуын балалары үҫкəс,
Үҙен белмəйəсəк башҡорттар...

Сабый йəнендəге саф бөрөгə
Асылмаҫтан ҡағыла ҡырауҙар.
Ситтəр ситлегенə биклəнгəнен
Миллəттəштəр ҡасан аңларҙар?

Үҙ теленə һөйөү һалынмаһа
Бишектəге сабый балаға,
Быуын-быуын килгəн данлы тарих
Етерме икəн барып аңдарға?

Тəпəй киткəс, һаңһыҙ һорау биреп
Төшөнгəндə донъя айышын.
Ҡайһы телдə тəтелдəр һуң бала,
Еңеүсеме булыр, байғошмо?

Ғаилəлə нигеҙ һалынғанда,
Ҡанда булған орлоҡ тиҙ шытыр.
Ата-əсə биргəн һабаҡ уны
Үҫтерерме, əллə ҡаҡшатыр?

Беҙ торабыҙ ете юл сатында,
Дөрөҫ китеү фарыз бер юлдан.
Туған тел ул беҙҙең башҡорт теле
Йөрəк итебеҙгə уйылған.

Һаҡланған да, яҡланған да ул тел,
Ҡандар ҡойоп, баштар һалынған.
Онотмаһын шуны килер быуын,
Онотмаһын тыуыр башҡорттар!

✔ *Әллә был башҡорттоң һуңғы сиккә ҡәҙәр түҙеп, ниндәйҙер хәл иткес мәлдә генә, бая әйткәнемсә, ҡапыл тоҡанып, вулкан һымаҡ атылыусы көскә эйә булыуынан киләме икән?*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ХУШ ЕҪЛЕ МӘТРҮШКӘНЕҢ...

## сәйе лә тәмле, килеме лә бар



**Кем генә мәтрүшкәле сәй эсергә яратмай! Арабыҙҙа ундайҙар юҡтыр, моғайын. Баллы-майлы мул өҫтәлдең бер йәме генә түгел, тымау тейгәндә тиҙ аяҡҡа баҫырға ярҙам итеүсе лә бит ул мәтрүшкәле сәй. Быны шулай икәнлеген аңлар өсөн бер ҡыш мәтрүшкәһеҙ сығыр кәрәк. Шуға күрә, һәр йәй мин етерлек кимәлдә мәтрүшкә йыйып киптерәм.**

Мәтрүшкә һаҡламым үҙемдең ғаиләгә генә түгел, туғандарға ла, йыйып өлгөрмәй ҡалған күрше-күләнгә лә етә. Быйыл иһә был үләндең тағы ла бер файҙаһын күрәм - уны ҡалаға алып барып һатам. Был фекергә мине ҡала кешеләре этәрҙе. Былтыр йәй еләк һатҡан саҡта күптәр мәтрүшкә алып килеүемде үтенде. Ҡайһы берәүҙәр хатта миңә ышанып, алдан уҡ аҡсаларын да биреп ҡуйҙы. Һорау булғас - тәҡдим дә бар, тинем дә ҡайтышлай уҡ урмандан бер ҡосаҡ мәтрүшкә йыйҙым. Икенсе көнөнә ҡалаға тик мәтрүшкә генә алып барҙым һәм уны тиҙ үк һатып бөттөм. Шуға күрә быйыл мәтрүшкәләр үҫеү менән ошо кәсепте юлға һалдым һәм арыу ғына килем алам. Мәтрүшкәгә ҡушып, һатып алыусыларға шулай уҡ һары мәтрүшкә һәм кейәү үләне лә тәҡдим итәм. Өсөһөнән дә берәр тотам булған бәйләмгә хаҡты 50 һум ҡуям. Өс-дүрт сәғәт эсендә һатып та бөтәм һәм тиҙ генә ҡайтып, икенсе көн алып барыу өсөн тағы яланға үлән йыйырға сығам. Еләк бешкәс, үләндәргә ҡушып, ҡайһы саҡта уныһын да һата башланым. Баҙарҙа 5 литр биҙрәләге еләк 500 һум тора, ә мин кәмендә 7 литрлыҡ биҙрә менән алып барам. Үлән һәм еләк йыйырға миңә йәйге каникулда ял итеүсе ҡыҙым ярҙам итә. Шулай итеп, бер барғанда 1500-2500 һум аҡса эшләп ҡайтам. Тәү ҡарашҡа күп түгел кеүек, ләкин өйҙә ултырһаң, уныһы ла булмаясаҡ, шуға күрә мәрүшкә миҙгеленән файҙаланып аҡса "һуғам".

Әлбиттә, килем һәйбәт нәмә, ләкин аҡса тип күҙ тондорорға ярамай. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡарашлы, ихтирамлы була белеү кәрәк. Шуға күрә, үләндәрҙе тамырҙары менән сыҡмаһын өсөн ҡырҡып ҡына алам һәм бер урында бөтөргәнсе йыймайым. Минең миҫалдан сығып, ошо юл менән аҡса эшләргә теләүселәргә лә был ҡағиҙәне үтәргә саҡырам. Беҙгә бар байлығын түкмәй-сәсмәй биреп торған тәбиғәтебеҙҙе рәнйетмәйек.

**Сәлимә ИШБИРҘИНА.**
**Әбйәлил районы.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәпләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ЭШҠЫУАРЛЫҠ...

## үҙ идеологияһына мохтаж

**Хәбирйән ТАҺИРОВ, Ҡыйғы районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе:** Бөгөн патриотик тәрбиәне эшҡыуарлыҡтан башларға кәрәк. Милли үҙенсәлектәрҙән сығып, эшҡыуарлыҡтың идеологияһын булдырыу шарт. Хәрби хеҙмәт, мәҙәниәт, тарих, милли традициялар һ.б. патриотик тәрбиә программаһында бар, ә эшҡыуарлыҡ, эшләп ашау хаҡында концепция юҡ. Ул патриотик тәрбиә программаһына айырым бер бүлек итеп индерелергә тейеш.

Ауылда шул эшҡыуарлыҡ үҫешмәгән өсөн эш урындары кәмей. Эш булмағас, йәштәр ауылда ҡалмай. Йәштәр китеп бөткәс, ауылда балалар юҡ. Ә балалар булмағас, мәктәптәр ябыла. Һөҙөмтәлә, ауылдар юҡҡа сыға. Был түңәрәктән сығып булмаҫ төҫлө, ләкин эшҡыуарлыҡты үҫтерһәк, күтәрмәләһәк, баҫма матбуғат биттәрендә ауыл ерендә аҡса табыу тураһында йышыраҡ мәғлүмәттәр бирелһә, хөкүмәт тарафынан етди ярҙам күрһәтелһә, эш алға китер ине. Сөнки әлеге ваҡытта сит ерҙәрҙә йөрөп ҡайтып, тыуған ауылында үҙ эшен булдырған йәштәребеҙ бар, тик улар артынан эйәреүселәр һирәк. Ә бына күрше Силәбе өлкәһендә, Татарстанда эшҡыуарлыҡты пропагандалау күптән яйға һалынған. Уларҙың эшҡыуарҙары бөтөн халыҡ мәнфәғәтендә ойошторолған сараларҙа, төрлө семинарҙарҙа ҡатнаша. Шуның өсөн унда эшҡыуарлыҡтың идеологияһы үҙенән-үҙе барлыҡҡа килә, халыҡ уларҙы күрә, ышана, таяна.

Беҙҙең эшҡыуарҙар араһында үҙ көсө менән тырышып ятыусы бер-нисә кеше бар, идеология булмағас, уларҙы берәү ҙә күрмәй ҙә, ярҙам да итмәй. Шуға ла Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ҡарамағында булһа ла был өлкәлә эш башланһа, халыҡ эйәрер ине, тип уйлайым.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Ниңә беҙҙең егеттәр футбол уйнамай?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Руслан БИКЕМБӘТОВ, педагогика фәндәре кандидаты, РФ-зың спорт мастеры, көрәш буйынса спорт мастеры:*** Теге йәки был төбәк спортсылары ниндәйҙер төргә шәп икән, был ошо халыҡтарҙың көс үҙенсәлектәренә бәйле. Мускулдар ике төрлө була: аҡ һәм ҡыҙыл. Аҡ мускулдар ауыр штанганы күтәрһә, ҡыҙыл мускулдар - ул ҡәҙәре ауыр булмаған штанганы күп тапҡырҙар күтәрә алыуы менән үҙенсәлекле. Көнсығыш халыҡтарының мускулдары аҡ, тимәк, тиҙ мускулдары ныҡ үҫешкән һәм шуға ла улар тиҙлек талап ителгән спорт төрҙәрендә алдыра. Ямайка кешеләренең ҡыҙыл оҙон мускулдары көслө, шуға уларҙың йүгереүселәре киң билдәле.

Ә беҙҙең, башҡорттарҙың, тәбиғәттән бирелгән спорт төрө нимә икән? Хоккейҙы популярлаштыралар ул, ләкин уны барыбыҙ ҙа уйнай алмай - ҡыйбатҡа төшә һәм ябыҡ катоктар етмәй. Футбол уйынын етерлек кимәлдә үҫтерергә ҡышҡы һыуыҡ осор ҡамасаулай. Бәлки, беҙгә спорт залдары эсендә генә шөғөлләнеү мөмкин булған төрҙәргә иғтибарҙы нығыраҡ йүнәлтергә кәрәктер? Мәҫәлән, шул уҡ ян, мылтыҡтан атыуға, пауэрлифтингҡа. Эльбрус Ниғмәтуллин исемле Рәсәйҙең иң көслө кешеһе титулына эйә башҡорт егете быға миҫал була ала. Минең үҙемдең тән тәҙәләшемә ҡарағанда ла, мине волейболсы ла, йөҙөүсе лә тип түгел, бәлки, шул уҡ шорт-трек, йә штанга күтәреүсе итеп күҙ алдына килтереүе еңелерәктер. Бәлки, мин тап ошо төрҙәр буйынса тағы ла алғараҡ киткән булыр инем. Штанга күтәргән саҡта шартлап торған көс һәм шул уҡ етеҙлек кәрәк, ә был сифаттар, йәғни, ҡапыл тоҡанып, вулкан һымаҡ атылыусы көс, беҙҙең башҡортта артығы менән. Ауылдарҙа көслө, бәһлеүән кәүҙәле егеттәр бар ҙа ул, ни өсөндөр улар профессиональ спортҡа ылыҡып бармай. Әллә был башҡорттоң һуңғы сиккә ҡәҙәр түҙеп, ниндәйҙер хәл иткес мәлдә генә, бая әйткәнемсә, ҡапыл тоҡанып, вулкан һымаҡ атылыусы көскә эйә булыуынан киләме икән?

Нимәне йәки кемде көтәбеҙ һуң беҙ? Көрәште олимпия уйындары исемлегенә индереүҙәрен көтәбеҙме? Әллә башҡа берәй сәбәп бармы? Миңә ҡалһа, ауылдарҙа, райондарҙа индивидуаль спортты үҫтереүсе саралар, түңәрәктәр аҙыраҡ. Беҙҙә күберәк команда менән уйнай торған спорт төрҙәренә иғтибар бирелә, ә шәхси, индивидуаль спортты үҫтереү аҡһай. Был юҫыҡта район кимәлендә Йылайыр, Баймаҡ, Бөрйән райондары үҙҙәренсә саралар үткәрә, шуныһы маҡтауға лайыҡ. Мәҫәлән, йылайырҙар - үҙ баһадирҙарын һабантуйҙа ат арбаһын һөйрәтеп, ә бөрйәндәр ауыр таштар ырғытып ярыштыра. Тимәк, улар дөрөҫ юлда. Индивидуаль спортҡа тәүге аҙымды шунан башларға кәрәк.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Дуҫтарығыҙ, таныштарығыҙ араһында 2014 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө" гәзитенә яҙылырға оноткандар барҙыр.** Уларҙы иҫкәртегеҙ әле: гәзитебеҙҙе сентябрҙән алдыра башлау мөмкинлеге бар. Унын өсөн 17 августа тиклем почта бүлексәләренә барып, 50665 индексы гәзитебеҙгә яҙылып ҡуйһындар. Дүрт айға яҙылыу хаҡы 338 һум 40 тингә генә төшәсәк.

Шулай уҡ августан "Киске Өфө" гәзитенә 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн дә яҙылырға мөмкин. Яҙылыу миҙгеленең һәр айында уҡыусыларыбыҙ өсөн дәртләндереү сараһы барлығын да беләһегеҙ: был юлы ла "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"; "История башкирского народа"; Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"; 2015 йылға "Башҡортса дини календарь" һәм башҡа китаптарға лайыҡ булырға теләгәндәр 2015 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәрергә онотмаһын.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Анатолий Медведев Украина территорияһынан килгән мәжбүри күскенселәрҙе урынлаштырыу мәсьәләренә арналған ултырыш үткәрҙе. Унда Башҡортостан Президенты вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты. Мәғлүмәттәр буйынса, әле Рәсәй территорияһында 144 мең мәжбүри күскенсе иҫәпләнә. Рәсәй Хөкмәте ҡарары менән уларҙы урынлаштырыуға бюджет ассигнованиелары ҡаралған һәм ул төбәктәргә бүленеп биреләсәк.

✔Бөтә Рәсәй "Рәсәй аллеяһы" акцияһы сиктәрендә алып барылған онлайн-тауыш биреүҙә беҙҙең төбәктең "йөшел" символына йүкә ағасы дәғүә итә. Уның өсөн 8260 кеше, 39 процент, тауыш бирғән. Икенсе урында ҡурай (реброплодник уральский) килә, ул 34 процент тауыш йыйған. Өсөнсө урынды 12 процент менән "Салауат Юлаев" сирене яулай. 6-шар процент тауыш мәтрүшкә һәм башҡорт тирәгенә бирелгән. Тауыш биреү 31 августҡа тиклем бара. Уның һөҙөмтәләре буйынса Севастополь ҡалаһының Еңеү паркында "Рәсәй аллеяһы" ултыртыласаҡ, уларҙа илдең һәр төбәген кәүҙәләндергән тәбиғәт комплексы урын аласаҡ. Аллеяны 2015 йылдың майында асырға планлаштыралар.

✔Өфөнөң аэропорт юлында тағы бер административ-сауҙа комплексы барлыҡҡа киләсәк. Ул Кооператив ялан ҡасабаһының юл буйындағы һүтелгән йорттар урынында төҙөләсәк. Һүтелгән йорттар хужаларына фатирҙар йәки аҡсалата компенсация биреләсәк. Яңы сауҙа үҙәгендә аҙыҡ-түлек продукттары, төҙөләш материалдары һатыласаҡ, шулай уҡ кафе һәм офистар урын аласаҡ.

✔1 августан ауыл мәҙәниәт йорттары өсөн "КЛУБ'ок XXI века" тип аталған республика конкурсы старт ала. Республика халыҡ ижады үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, һайлап алыу туры бер ай дауам итә. Конкурста ҡатнашыу өсөн ғаизаларҙы 31 июлгә тиклем биреп өлгөрөргә кәрәк.

✔Башҡортостанда йыл һайын үткәрелә торған "Трактор" операцияһы старт алды. Айлыҡ 22 августҡа тиклем дауам итәсәк. Операция мәлендә иң тәүҙә техниканың төҙөклөгөнә, уның менән идара итеүсе кешеләрҙең документтарына иғтибар ителәсәк.

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ЯҘЫУСЫЛАР БИТ...

## милләт хәтере

Бала сағым һуғыш осоронда бәләкәй генә ауылда үтте. Радио түгел, гәзит төшөнсәһе лә булманы. Фронттан (һуғышта 16 ауылдашым ҡатнашҡан) килгән хаттарҙы кем уҡыған икән? Хәтеремдә, Юлдыбай мәктәбенә 5-се класҡа уҡырға барҙым. Класс етәксеһе ҡушҡас, китапханаға китап алырға индем. Беренсе китабым йоҡа ғына "Мыяубикә" исемле ине. Китапханасы Менәүәрә апай (исеме әле лә иҫтә) миңә көлө-бөрәк ҡарап ҡуйҙы. Кәүҙәм арыу ғына булыуға ҡарамаҫтан, уҡыуға бик һуң төшкәйнем шул. Һуңлатыусыһы - һуғыш ине. Ә һуңынан китаптар яҡын дуҫыма әйләнде. Салауат ҡалаһында уҡыған, эшләгәндә М. Шолоховтың яңы ғына донъя күргән "Тымыҡ Дон"ын сират баҫып уҡый торғайныҡ хатта... Һуңынан шәхси китапханам барлыҡҡа килде.

Беҙ мәктәптә уҡыған осорҙа "Туған әҙәбиәт" дәреслектәре йөкмәткеһе менән ярлы булды. Әле лә уҡыусы саҡта яҙған көндәлектәремә күҙ һалам да, бигерәк наҙан үҫкәнбеҙ, тип ҡуям. Үҙ халҡыбыҙ тарихын, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен белмәгәнбеҙ. Урыҫ әҙәбиәтен "Слово о полку Игореве"ны өйрәнеүҙән башланыҡ. Ғәжәпләнеү сикһеҙ ине - мең йылдар алда яҙылған әҫәрҙе өйрән әле! (Хәйер, ул әҫәрҙән иҫтә ҡалған һөйләм "О ветер ветрило" ғына). Халҡымдың бындай боронғо әҫәре юҡ, тип уйлай инек. Совет власы башҡорт халҡына тел, яҙма бирҙе, тип инандыҡ. Крашенинниковтың, йә Успенскийҙың "...погибает башкир, погибает..." тип "уфтаныуҙарын" яҡшы үҙләштерҙек. Шуғалыр, туған әҙәбиәт дәрестәрендә һәр йыл бер үк ижадсыларҙы, йә урыҫсанан тәржемәләрҙе тылҡыныҡ. Ул осорҙа баяғы "Слово..."нан да алдараҡ яҙылған халҡым әҫәре, йә булмаһа, күренекле әҙип-сәсәндәребеҙ булыуы тураһында телгә лә алынманы.

Халҡым электән талантлы булған. Талантын һуңғы осор тойҙоҡ, күрҙек, яҙыусыларыбыҙ донъя кимәленә сыҡты. Әҙәбиәт нимә һуң ул? Матурлап, ҡупшылап әйтер һүҙме? Әллә тәрбиәүи һүҙ өлгөһөмө? Аҙаҡҡыһылыр. Һүҙ - уҡҡа, ҡылысҡа тиң, мәңгелек. Шуны аңлап та Пушкин:

*Я памятник себе воздвиг*
*нерукотворный,*
*К нему не зарастет*
*народная тропа,*
*Вознесся выше он*
*главою непокорной*
*Александрийского столпа,* - тип яҙған.



**Ғүмерҙең 80 йәшен теүәлләгән осорҙа уйланыу, баһалау, күҙ асылыу, нисектер, үҙенсәлекле була баралыр. Әҙәбиәт өлкәһендә һай йөҙәм. Ғүмерҙең башланғысында иһә уны аңлап та еткермәгәнмендер. Шулай ҙа бер уҡыу йортоноң тупһаһын бер осорҙа тапаған һабаҡташым, шағир Риф Мифтаховтың 75 йәшлек юбилейы айҡанлы уның һәм ҡәләмдәштәренең - яҙыусыларыбыҙҙың яҙмышына борсолоп яҙам был һүҙҙәрҙе. Әйткәндәрем, бәлки, бөгөнгө быуын кешеләренә, бигерәк тә йәштәргә мөрәжәғәт һымаҡ та ҡабул ителер.**

Беҙҙең быуын, әҫәрҙәр геройҙарынан үрнәк алып, тау артындағы булмаған коммунизмды тиҙерәк күреү өсөн яңынан-яңы үрҙәргә ынтылды, уларҙы яуланы, илгә тоғро ҡалды. "И дым отечества нам сладок и приятен", йәки "Служить бы рад, прислуживаться тошно" тигән Чацкийға эйәрҙек. "Жизнь дается человеку один раз, и прожить ее надо так, чтобы потом не было больно вспоминать", тигән П. Корчагиндан үрнәк алдыҡ. Әҙ булманы инде беҙгә үрнәк әҫәр геройҙары. Ә һуғыш осоро һуң? Твардовскийҙың Василий Теркины йәки Мостай Кәримдең Үлмәҫбайы ҡағыҙ битендә генә йәшәмәне, ә миллионлаған Теркиндар, Үлмәҫбайҙар тыуҙырҙы. Һәм тап улар беҙгә еңеү килтерҙе. Һанай китһәң, әҙәби әҫәрҙә халыҡтың төп байлығы - рух ныҡлығы алға сығарылғаны асыҡ. Совет власы уға айырыуса әһәмиәт биргән һәм яңылышмаған. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа финанстар министры А. Зверев, ҡайһы бер яҙыусыларҙың юғары гонорарҙар алыуына борсолоп, Сталинға аңлатмалы яҙыу яҙа. Сталин уны үҙенә саҡырып , шулай ти: "Зверев иптәш, ҡайһы бер яҙыусыларҙың миллионер булыуы ҡурҡыныс түгел, бындай яҙыусыларҙың аҙ булыуы хәүефле. Яҙыусылар - улар милләттең хәтере. Улар аслы-туҡлы йәшәһә, нимә яҙа аласаҡтар һуң?"

Эйе, яҙыусы ла үҙ бурысын, яуаплылығын аңлаған. Мостай ағай Кәрим:

*Дау-бәхәс беҙҙә*
*Ят түгел ине.*
*Әммә ыҙғыш та*
*Ваҡ түгел ине,* - тип, юҡҡа яҙмағандыр. Үҙ урынын билдәләгән ул яҙыусы. Тайпылыуҙарға юл да ҡуйылмаған. Мәғлүм ки: үҙенең партия ағзалығынан сығарылғанлығын ишеткән Баязит Бикбай йыйылыштан илап сығып киткән. Был күренештән ҡапыл айныған етәксе: "Бар артынан, берәй нәмә булып ҡуймаһын", - тип, уның янына кеше ебәргән. Тимәк, барыбер ҙә кешеләрҙе хәстәрләгәндәр, уларҙың күңелен уйлағандар.

Ә бөгөн? "Ҡәҙерһеҙләп әрһеҙләнә никтер, ҡулъяулыҡтан арзан ҡыҙ-ҡырҡын..." - тип яҙған Тамара Ғәниева һүҙҙәренә иғтибар итһәк, тик ҡыҙ-ҡырҡын ғына осһоҙланамы, тип уйлайһың. Ғөмүмән, йәшәү осһоҙлана бара түгелме? Кешенең кәрәге ҡалмай, буғай. Айырым һөнәр кешеләре юғала. Шиғыр менән йәшәп булмай, тип, Себер тарафтарына олаҡҡан шағирыбыҙҙы онотмайыҡ. Сөнки улар һанға һуғылмай, эшләр өсөн шарттар тыуҙырылмай.

Бөгөн телебеҙҙән төшмәгән Достоевский, Некрасов, Тургенев, Толстой кем иҫәбенә йәшәгән, ижад иткән икән? Ярай, Тургенев Полина Виардо иҫәбенә Парижда йәшәгән, Лев Толстой заманының "серегән байы" булған. Ҡалғандары? "Вы забыли о культуре, но культура не забыла о вас", - тип оран һала шағир Айҙар Хөсәйенов ("Истоки" №45, 2013 г.) заман байҙары ярҙамына ышанып-ялбарып. Ә Спивак уға:"Бөгөн байҙарҙа һинең ҡайғың юҡ. Уларға аҡса, тик аҡса ғына кәрәк!" - тип яуаплай ("Истоки" № 51, 2013 г.).

Ысынлап та шулайҙыр. Әгәр сәнғәткә (тимәк, әҙәбиәткә лә) бындай ҡараш булмаһа, Рәсәй яҙыусылары съезы, үгәйһетелеп, Калугала үтмәҫ ине. Ил килеменең 70-80 процентын үҙенә туплаған Мәскәү шул ойошманы артыҡ күреп, эш урыны бинаһынан, торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа түләүҙәрең күп, тип, ҡыуып сығармаҫ ине. Хатта съезд үткәрер урын да тапмасәле. "Москва гордится своими золотыми куполами, а окраины России всегда жили в нищете", тип белдергән Морад Аджи хаҡлы түгелме? Маҡталған Мәскәү мэры Собянин иғтибарлымы сәнғәт кешеләренә? Ил яҙыусылары йыйыла бит, тип, съезда ҡатнашмаһа ла, исмаһам, күңел өсөн ҡотлау сәләме ебәрҙеме?

"О-о времена!", "О-о нравы!" тигән заманында бер ватандашыбыҙ. Риф ҡорҙаш, һинең дә, башҡорт яҙыусыларының да хәл-ҡәҙерен самалап яҙам был юлдарҙы. Былтыр декабрҙә Башҡортостан юлдаш каналында Әнүәр ағай Бикчәнтәевкә арналған тапшырыу булды. Унда башҡорт әҙәбиәтенән уҡытҡан өлкән генә ханым: "Әнүәр Бикчәнтәев иртә үлеүе менән бәхетле. Бөгөнгөнө күрһә, йәшәй алмаҫ ине", - тине. Йә булмаһа, В. Ганичевтың яҙыусылар съезында: "Есть сужение фронта нашей книги. Это объясняется катастрофическим расслоением российского общества, мир алчности диктует свою злую волю", - тип сығыш яһауы үҙе үк хәлкәйҙәрҙең хәлсә булыуын аңлатмаймы? Шулай ҙа замана ла үҙгәрер, яҙыусыларыбыҙ, шағирҙарыбыҙ ҙа ижад юлынан тайпылмаҫ, яңынан-яңы китаптар яҙылыр, тип өмөт итәйек әле.

*Товарищ, верь. Взойдет она*
*Звезда пленительного счастья,* - тип, киләсәгенә ышаныс менән яҙған бит бөйөк шағир.

**Хөрмәтле һабаҡташым Риф Мифтахов! Бер осор уҡыған йәштәрҙән әҙәбиәтебеҙ күген яҡтыртыусы бынамын тигән шағир, прозаиктар үҫте. Ҡыуанып бөтә алмайым. Улар төрлө дәрәжәләр алды, бүләкләнде. Һин, үҙең яҙғанса, "күҙгә эленеп" барманың. Әммә һинең аяҡ аҫтында тапалып ятҡан, кемдеңдер күңеленә лә эләкмәгән тойғо-күренеште кеше күңеленә үтеп инерлек, уйландырыр-фәһем алырлыҡ тойғолар тыуҙырған шиғри юлдарға һалыуыңа ҡыуанам. Халыҡҡа яҡынһың. Ана, оло ағайың тураһында ниндәй матур тойғо менән яҙҙың. Был - кеше ҡәҙерен белеү.**

**2014 йыл илдә, республикала Мәҙәниәт йылы тип иғлан ителде. Мәҙәниәт - ул әҙәбиәт тә. Әҙәбиәтебеҙгә, яҙыусыларыбыҙға иғтибар артып, емерелеп-һүнеп барған рухи байлығыбыҙға шифалы елдәр иҫһә ине.**

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Граждандарҙы авария хәлендәге торлаҡ фондынан күсереү өсөн Башҡортостан Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалауға булышлыҡ итеү фондынан 930,14 млн һум аҡса аласаҡ. Был аҡса 6583 кешене 271 авария хәлендәге йорттан күсереү өсөн тотоноласаҡ. 2008 йылдан алып Фонд тарафынан күсерелгән 12,68 млрд аҡсаға, шулай уҡ республика бюджетынан бүленгән 6,35 млрд һумға 1331 йортта капитал ремонт үткәрелеп, 242,7 мең кеше торлаҡ шарттарын яҡшыртҡан, 878 авария хәлендәге йортта йәшәгән 23 мең гражданға яңы фатирҙар бирелгән.

✓Украинанан күсеп килеүселәр өсөн БДУ-ның санаторий-профилакторийы базаһында Берҙәм консультация пункты эшләй башланы. Уның адресы: Зәки Вәлиди урамы, 33-сө йорт. Был пунктҡа урынлаштырыу Өфөләге "Ҡотҡарыу хеҙмәте 112" мәғлүмәт-диспетчер үҙәге аша атҡарыла. Күскенселәр өсөн бында өс тапҡыр ашатыу, медицина һәм психологик ярҙам ойошторолған.

✓Яҙғы саҡырылышта Башҡортостандан 6 мең егет Рәсәй армияһы сафтарын тулыландырған. Уларҙың 1200-ө - юғары белемле. Егеттәрҙең һәр береһенә хәрби часҡа килгәс тә персональ электрон карталар өләшеп бирелгән.

✓Башҡортостанда Рәсәй студенттары хоҡуҡтары буйынса вәкиллектең Республика филиалы ойоштороласаҡ. Рәсәй студенттары хоҡуҡтары буйынса вәкил Артем Хромов хәбәр итеүенсә, студенттар үҙҙәре идара итәсәк вәкиллек былтыр ғына барлыҡҡа килгән һәм ул хәҙер күп төбәктәрҙә ойошторорола.

✓Башҡорт дәүләт медицина университетының спорт үҙәге базаһында кикбоксинг буйынса I Донъя студенттар чемпионаты үтте. Унда 17 илдән 164 спортсы, Рәсәйҙең 20 ҡалаһынан, шул иҫәптән Башмедуниверситет командаһы ҡатнашты. Дөйөм команда еңеүен Рәсәй студенттары, шул иҫәптән призлы урындарҙы Башмедуниверситеттың өс студенты яуланы.

✓"Салауат Юлаев" хоккей командаһы уҡыу-күнекмә йыйындары үткәреү өсөн Словенияға китте. Улар унда ун дүрт көн буласаҡ.

**"Башинформ"дан.**

✔ ***Бөгөн баш ҡалала юлдарҙың бер өлөшө төнөн ремонтлана. Ләкин кешегә ай ҙа, ҡояш та ярамай, тигәндәй, төнгө ваҡытта эшләү ҡала халҡының төнгө ялына ҡамасаулай.***



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# АҠСА ҺАНАҒАНДЫ ЯРАТА

**Иҫәпһеҙҙең ҡуйы теүәл, тиһәләр ҙә, аҡса иҫәпләп торғанды һәм үҙенә яҡшы мөнәсәбәт булғанды ярата, имеш. Әлбиттә, янсығында тәңкәләр генә шылтырағанда һәм уның һанын аныҡ белгәндә, иҫәпләнең ни ҙә, иҫәпләмәнең ни. Ә бына миллиардтар менән эш иткән бюджет "кесәһен" даими тикшереп тороу зарур. Был йәһәттән, Өфө ҡала округы хакимиәте ярты йыл һайын матбуғат конференцияһында килемдәр һәм сығымдар буйынса отчет бирә. Традицияға тоғро ҡалып, ошо көндәрҙә ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Илгиз Насретдинов тағы ла ҡала янсығына "ревизия" яһаны.**

Өфө ҡалаһы бюджетына йылдың тәүге яртыһында барлығы 8 миллиард 422 миллион һум аҡса ингән. Ә инде аныҡланған план буйынса һалым һәм һалым булмаған килем 11 миллиард 132 миллион һум тип күҙалланһа, 1 июлгә ҡарата был сумма 5 миллиард 135 миллион һум, йәғни йыллыҡ планға ҡарата 46 процент тәшкил итә.

Нормала ҡаралған күләм торлаҡ фондына инмәгән күсемһеҙ милекте һатыу һәм реклама урынлаштырыу (77 процент), ер һалымы (59 процент), һалым һалыуҙың ябайлаштырылған системаһы буйынса һалым һалыуҙы ҡулланыу (58 процент), дәүләт пошлинаһы (54 процент) буйынса артығып үтәлгән. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда үҫкилем 13 процентҡа, йәғни 592 миллион һумға артҡан.

Йыл башынан алып биш ай эсендә ҡала районы хакимиәттәре ҡарамағындағы ведомство-ара комиссиялар тарафынан йөҙҙән ашыу кәңәшмә уҙғарылып, уларҙа бурысы йыйылған 1400 һалым түләүсенең эше тикшерелгән. Һөҙөмтәлә бюджетҡа 218 миллион бурыстың 208 миллионы ингән.

Муниципалитетҡа шулай уҡ республика бюджетынан да ярҙам күрһәтелә. Ярты йылда унан 3 миллиард 805 миллион һум ингән, шуның 810 миллион һумы - субсидиялар. Республика бюджетынан ингән аҡсаларҙың яртыһы юлдарҙы тейешле кимәлдә тотоуға йүнәлтелә.

Сығымдарҙың төп өлөшөн социаль өлкә, торлаҡ-коммуналь хужалығын финанслау һәм тәҙеккәләндереү алып тора. Аныҡлап әйткәндә, мәғариф дөйөм сумманың - 44, торлаҡ-коммуналь хужалығы - 28, һаулыҡ һаҡлау 4 процентын "ашай" Ярты йылда мәғарифҡа 4 миллиард 527 миллион һум аҡса йүнәлтелгән. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 10 процентҡа күберәк. Был сумма граждандарҙың мәктәпкәсә, төп дөйөм һәм өҫтәмә белем алыуға дәүләт гарантияларын тәьмин итеүгә йүнәлтелгән. Дөйөм сығымдарҙың билдәле бер өлөшөн педагогтарға, тәрбиәселәргә эш хаҡы түләү һәм башҡа түләүҙәр алып тора. Әлеге ваҡытта педагогтарҙың уртаса айлыҡ эш хаҡы - 25305, тәрбиәселәрҙеке 20190 һум тәшкил итә.

Журналистарҙы бюджет дефициты мәсьәләһе лә ҡыҙыҡһындырмай ҡалманы. "Аныҡланған план буйынса килем өлөшө 20 миллиард 862 миллион һум, сығым өлөшө 22 миллиард 933 миллион һум күләмендә ҡаралған, - тине Илгиз Диҡҡәт улы. - Әммә был күрһәткес йыл һуңында ла шул кимәлдә буласаҡ, тип әйтеп булмай. Ул ай һайын үҙгәреп тора".

Әлеге ваҡытта Рәсәйгә генә түгел, төбәктәргә Украинанан ҡасаҡтарҙың килеүе һәм уларҙы урынлаштырыу, тәүге мәлдәрҙә ярҙам күрһәтеү ҡала бюджетына нисек йоғонто яһаясағы ла күләм осталарын ҡыҙыҡһындырҙы. Сөнки бюджетта был осраҡҡа сығымдар ҡаралмаған. Шул уҡ ваҡытта ҡасаҡтар миграция хеҙмәтендә рәсми рәүештә "ҡасаҡ" статусы алыу менән ҡала уларҙы ваҡытлыса урынлаштыра ала. Был осраҡта инде финанслау федераль бюджет тарафынан башҡарылырға тейеш.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ӘЛЕГӘ ДҮРТ КАНДИДАТ

**19 июлдә Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһына кандидаттарҙың теркәү үтеү өсөн тапшырған документтарын ҡабул итеүҙе тамамланы.**

Әлеге ваҡытта юғары посҡа дүрт кеше дәғүә итә: Илдар Бикбаев - Башҡортостан Республикаһының Йәмәғәт палатаһы аппараты етәксеһе, "Рәсәй патриоттары" сәйәси партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе тарафынан күрһәтелгән; Иван Сухарев - алтынсы саҡырылыш РФ Дәүләт Думаһы депутаты, Граждан, еңәйәт, арбитраж һәм процессуаль ҡануниәт буйынса комитет ағзаһы, ЛДПР-ҙың Башҡортостан төбәк бүлексәһе тарафынан күрһәтелгән; Рөстәм Хәмитов - ваҡытлыса Башҡортостан Республикаһы Президенты вазифаһын башҡарыусы, "Берҙәм Рәсәй" Бөтә Рәсәй сәйәси партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе тарафынан күрһәтелгән; Юнир Ҡотлоғужин - "Рәсәй Федерацияһы Коммунистар партияһы" республика бүлексәһенең секретары, КПРФ-тың Башҡортостан төбәк бүлексәһе тарафынан күрһәтелгән.

Эш төркөмө 10 көн эсендә тәҡдим ителгән документтарҙы, ҡултамғаларҙы тикшереп, кандидаттарҙы теркәү-теркәмәү тураһында ҡарар сығарасаҡ. Йомғаҡлау исемлеге 28 июлдән дә һуңлатмай иғлан ителәсәк.

# ҠОСАҒЫНА АЛА БАШҠОРТОСТАН

**Әлеге ваҡытта Волга буйы федераль округына Украинанан 16 мең ҡасаҡ килгән. Башҡортостанға килеүселәрҙең һаны ла ике меңләп булып китте. Уларҙы баш ҡаланан 100-150 километр радиуста урынлашҡан бәләкәй ҡалаларҙа ваҡытлыса урынлаштырасаҡтар. Варианттар сифатында Бөрө, Салауат, Бәләбәй, Стәрлетамаҡ һәм ауыл муниципаль районлары ҡарала.**

21 июлдә уҙғарған кәңәшмәлә Рөстәм Хәмитов ошо хаҡта белдерҙе һәм, эшселәр етешмәгән урындарҙа ҡасаҡтарҙы эшкә урынлаштырыу еңелерәк буласаҡ, тип билдәләне. Эш табыу мәсьәләһе, торлаҡ кеүек үк, мөһим түгел, сөнки ҡасаҡтарҙың күпселеге эшсе һөнәрҙәренә эйә. Уларҙы эшкә урынлаштырыу менән Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы шөғөлләнә, шул уҡ ваҡытта күпселек күскенселәр үҙҙәре тапҡан ваҡытлыса эшкә урынлаша. Ваҡытлыса урынлашыу урындарында миграция хеҙмәте, Пенсия фонды, Халыҡтың мәшғүллек үҙәге һәм башҡа органдар һәм ведомстволар вәкилдәре, тәүлек әйләнәһенә полиция һәм медицина хеҙмәткәрҙәре эшләй. Көнөнә өс тапҡыр йылы аш бирелә, интернет селтәренә инеү мөмкинлеге тәьмин ителгән, балалар өсөн уйын бүлмәләре йыһазландырылған. Хөкүмәт ҡарарына ярашлы, Украинанан килгән ҡасаҡтарҙы урынлаштырыу мәсьәләләре буйынса эш төркөмө ойошторолған, күскенселәрҙең көнкүрешен һәм социаль адаптация үтеүен тәьмин итеүсе ҡыҙыҡһыныусы ведомстволарҙың эшенә йүнәлеш биреүсе оператив штаб булдырылған.

Бөгөнгә бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам күрһәтеү һәм уны биреү тәртибе буйынса норматив-хоҡуҡи акттар проекты әҙерләнгән. Матди ярҙам бер кешегә 5 мең һум тәшкил итә. Шулай уҡ муниципаль районларға һәм ҡала округтарына бер кешегә түләгенә 800 һум иҫәбенән ҡасаҡтарҙың йәшәүе, туҡланыуы һәм башҡа сығымдарын ҡаплауҙың күләме билдәләнгән.

# ТЫҒЫНДАР СӘБӘБЕ НИ?

**Баш ҡала урамдарында пик сәғәттәрендә генә түгел, хатта ял көндәрендә лә ҡайһы бер урындарҙа тығындарҙа торғанығыҙ барҙыр, моғайын. Был урамдарҙа транспорттың йылдан-йыл күбәйеүе менән аңлатыла. Уны халыҡтың тормош кимәле яҡшырыуы менән дә бәйләйҙәр, әммә күпселек осраҡта кредитҡа алынған машиналарға ҡарап ҡына кешенең тормош кимәлен билдәләү мөмкин түгелдер.**

Тығындарға килгәндә инде, ҡышҡыһын яуым-төшөмдөң саҡ ҡына артыҡ булыуы һәм тейешле хеҙмәттәрҙең ҡарҙы ваҡытында таҙартып өлгөрмәүе сәбәп булһа, йәйгеһен инде юлдарҙың ремонтҡа ябылыуы бер аҙ уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра. Әммә юлдарҙы ремонтламай ҙа булмай, сөнки тигеҙ һәм матур юлдар - үҙе үк транспорт саралары менән идара итеүселәр өсөн бәхеттең бер өлөшө.

Бөгөн баш ҡалала юлдарҙың бер өлөшө төнөн ремонтлана. Ләкин кешегә ай ҙа, ҡояш та ярамай, тигәндәй, төнгө ваҡытта эшләү ҡала халҡының төнгө ялына ҡамасаулай. Ошо һәм башҡа факторҙарҙы иҫәпкә алып, эштәрҙе көндөҙ ҙә дауам итергә тура килә. Әммә нисек кенә булмаһын, был эштәр халыҡтың именлеген һәм уңайлы йәшәү шарттарын күҙ уңында тотоп башҡарыла.

# ЕТЕМ БАЛАЛАРҒА ЯРҘАМҒА

**Баш ҡала "Беренсе тапҡыр беренсе синыфҡа. Етем балаларға ярҙам ит" мәрхәмәтлек акцияһы старт ала.**

Беренсе сентябрь - уҡыусыларҙың, бигерәк тә беренсе тапҡыр мәктәп тупһаһын аша атлап инеүселәрҙең иң шатлыҡлы һәм тантаналы көндәренең береһе. Был көн уларҙың күңелендә мәңгегә һаҡланһын һәм тик шыңғай кисерештәр генә бүләк итһен өсөн, ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалғандарға һәм етемдәргә айырым иғтибар булырға тейеш. Яңы уҡыу йылы алдынан быйыл акция уҙғарыу изге йолаға әйләнде. Быйылғыһы - иҫәп буйынса дүртенсеһе. Баш ҡаланың балалар йорттарында һәм ғаиләнә алмаштырыусы ғаиләләрҙә тәрбиәләнеүсе, быйыл беренсе тапҡыр көмөш ҡыңғырау сыңын ишетеүсе 115 йәш өфөлөгә мәрхәмәтлек ярҙамы сифатында 115 комплект яңы:

- китаптар, уҡыу әсбаптары, канцтауарҙар, портфелдәр (ранецтар);
- спорт инвентары һәм спорт формаһы;
- фекерләүҙе үҫтереүсе уйындар, уйынсыҡтар;
- бүләк сертификаттары;
- уҡыу өсөн кәрәкле башҡа тауарҙар (килешеү буйынса) ҡабул ителә. Барлыҡ әйберҙәр һәм тауарҙар сифат сертификатына эйә булырға тейеш.

Шулай уҡ 1 сентябрҙә ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған һәм етем балалар өсөн аниматорҙар ҡатнашлығында күңел асыу саралары ойоштороу ҙа күҙаллана.

Барлыҡ өфөләрҙе, битараф булмағандарҙы акцияға ҡушылырға саҡырабыҙ! Өҫтәмә мәғлүмәтте 8 (347) 241-43-90 телефоны буйынса алырға мөмкин.

**"Башинформ".**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Быйыл Федераль һалым хеҙмәтенең Башҡортостан идаралығы өс меңдән ашыу эшҡыуарға патент биргән. Улар араһынан 618 эшҡыуар йөк ташыу буйынса автотранспорт хеҙмәтенә махсуслашыуға патент алған. Бик киң таралған эшмәкәрлек төрҙәренә эшҡыуарҙың мөлкәт хоҡуғындағы торлаҡ һәм торлаҡ булмаған йорттарҙы, дачаларҙы, ер участкаларын ҡуртымға биреү, авто- һәм мотоциклдарҙы техник хеҙмәтләндереү һәм ремонтлау, парикмахерлыҡ һәм косметик хеҙмәт күрһәтеү кеүектәр инә. Былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда һалым органдарында иҫәптә торған һәм һалым түләүҙең патент системаһы менән файҙаланған эшҡыуарҙар бер аҙға артҡан.

✔"Аҡбуҙат" балалар һәм үҫмерҙәр фильмдары кинофестивален ойоштороу комитеты иң яҡшы башҡорт фильмы сценарийына конкурс иғлан иткәйне. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ: былдай кинофестиваль Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылында ла үткәйне. Конкурс шарттары буйынса 2-20 битлек сценарий "Йондоҙ ауырыуы", "Бәхетле бала саҡ", "Ауыл", "Мөхәббәт" темаларына арналырға тейеш. Сценарийҙар 7 августа тиклем Rafis665@gmail.com электрон почтаһында ҡабул ителә.

✔Баш ҡаланың Ленин урамында реклама элә торған металл таяуҙар һүтеп алынды. Өфөнөң тарихи үҙәгендәге төп урамдарҙың береһендә бынан һуң реклама яҙыуҙары бөтөнләй булмаясаҡ, тип хәбәр иттеләр мэриянан.

✔Күгәрсен районының Тәүәкән хужалығы базаһында IX Ҡымыҙ эшләүселәрҙең һәм I Йылҡысыларҙың республика ярыштары булып үтте. 40 ҡатнашыусы араһынан Әлшәй районынан Руслан Ахунов иң яҡшы ҡымыҙ эшләүсе тип танылды. Уға башҡорт тоҡомло ҡолон бүләк ителде. Тәүәкән хужалығынан Фаил Юлдашбаев 18 конкурсант араһынан иң яҡшы йылҡысы тип табылды.

✔Быйыл Рәсәй Президенты Владимир Путин яңы форматтағы ГТО системаһын ҡайтарыу тураһындағы указға ҡул ҡуйҙы. Уға ярашлы, Өфөлә турник комплекстары урынлаштырыу буйынса адрестар исемлеге төҙөлә. Әлегә ете райондың һәр береһендә берәр комплекс ҡуйыласаҡ.

ҺӨЙЛӘҺӘҢ - ҺҮҘ

# ЧИНОВНИКТАР...

## автобуста йөрөрмө?



**Рәсәй йәмәғәт инициативаһы ойошмаһының эксперт эш төркөмө Хөкүмәткә эш автомобилдәренең хаҡын 1,1-1,2 миллион һум менән сикләү мәсьәләһен ҡарарға тәҡдим итә.**

Мәғлүмәттәр буйынса, быға тиклем Рәсәй йәмәғәт инициативаһы сайтында 1,5 миллион һум планкаһы билдәләнеп, уның өсөн 100 меңдән ашыу кеше тауыш биргән. Бынан тыш, эш автотранспорты булмаған дәүләт һәм муниципаль хеҙмәткәрҙәргә юл хаҡын аҡсалата ҡайтарыу менән алмаштырыу ҙа тәҡдим ителә. Йәғни эш урынына улар шәхси автомобилендә йөрөй йәки йәмәғәт транспорты, такси хеҙмәте менән файҙалана икән, сығымдар компенсацияланасаҡ.

Был тәҡдимдәр юҡтан ғына килеп тыумаған, сөнки быйыл июль башында Йәмәғәт халыҡ фронты, Дәүләт Думаһының "Берҙәм Рәсәй" фракцияһы ағзалары түбәнге палатаға федераль контракт системаһы тураһындағы законға төҙәтеүҙәр индереп, эш автомобилдәре һатып алыу өсөн сумманы өс миллион менән сикләүҙе тәҡдим иткәйне. Ләкин Алексей Навальныйҙың закон проекты порталда 100 мең тауыш йыйып, бер аҙ тәгәрмәскә таяҡ тыҡты.

Быға тиклем төбәк етәкселәре үҙ белдектәре менән үҙҙәренә сик билдәләй башлағайны инде. Мәҫәлән, Санкт-Петербург губернаторы мартта уҡ башҡарма власть ихтыяжы өсөн 1,1 миллиондан ҡиммәт булған машиналарҙы һатып алыуға юлды япты. Майҙа шундай уҡ ҡарарҙы Иркутск өлкәһе губернаторы ла ҡабул итте. Ә июндә иһә Удмуртияның Финанстар министрлығы еңел автомобилдәргә барлыҡ конкурстарҙы тыйҙы.

Чиновниктар өсөн эш машиналарына хаҡты сикләү көнбайыш илдәренә ҡарағанда Ҡытай өсөн нығыраҡ хас. Былтыр унда провинция чиновниктарын ҡиммәтле эш машиналарын аукционда һатырға мәжбүр итәләр һәм асыҡланыуынса, бер провинцияла ғына улар ҡаҙна автопаркының 80 процентын алып торғанлығы асыҡлана. АҠШ-та һәм Европа советы илдәрендә эш автомобилдәренә хаҡ үҙәкләштерелеп билдәләнмәй. Унда вазифа юғарыраҡ булған һайын, машинаның хаҡы ла ҡиммәтерәк булыуы мөмкин. Әммә эш транспортын шәхси мәнфәғәтендә файҙаланыу тураһында мәғлүмәт халыҡ араһында таралһа, чиновникты етди күңелһеҙлектәр көтә, хатта эштән бушатыуҙары ла ихтимал. Бөгөн ЕС структуралары чиновниктары йөрөгән машиналарҙың хаҡын һумдарға әйләндергәндә, маркалары төрлө булһа ла, улар 1,2 миллион һум тора. Тимәк, Рәсәй чиновниктарын да Европа стандарттарына тап килгән машиналарға ултыртырға мөмкин, был уларҙың бәҫен һис кенә лә төшөрмәйәсәк.

Был йәһәттән РФ Хөкүмәте рәйесе Дмитрий Медведев сит ил машиналарын дәүләт һәм муниципаль мәнфәғәттәргә һатып алыуҙы тыйыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Быны ул ватан етештереүсеһененең дә сит ил маркалары менән конкурентлыҡҡа һәләтле булыуы, әммә бюджеттан иҫ киткес күп аҡса сит ил компанияларына китеүенә бәйле хәл менән аңлатты. Икенсе яҡтан, был ҡарар ил етештереүсеһенә базаны технологик яҡтан модернизациялау өсөн өҫтәмә мөмкинлектәр бирергә тейеш һәм ул сит ил компаниялары менән хеҙмәттәшлектән баш тартыуҙы аңлатмай, киреһенсә, ике яҡтың предприятиеларын берләштереүгә килтерергә тейеш. Әлбиттә, чиновниктар быға ҡаршы сығасаҡ һәм дәүләт иҫәбенә сит ил машиналарында елдерергә теләйәсәк. Сөнки Рәсәйҙә чиновниктың машинаһы уның ниндәй ҡатламға ҡараууының күрһәткесе булып тора. Башҡа күрһәтерҙәй сифаттары булмағас ни...

Ә инде бына эш машинаһы булмаған осраҡта чиновниктарға аҡсалата компенсация түләү мәсьәләһенә килгәндә, ЕС-та уның күләме 892 евро. Беҙҙең аҡсаға әйләндергәндә ул 3000 һумдан ашыуыраҡ. "Провинцияла был аҡса чиновникка йәмәғәт транспортында йөрөргә, хатта шәхси машинаһы өсөн бензинға ла, моғайын, етер. Әммә бик төпкөл провинцияларҙа ғына. Мәскәүҙә, Питерҙа һәм башҡа күпселек ҙур ҡалаларҙа өс меңгә транспортта йөрөргә мөмкин, әммә бензинға етмәйәсәк. Ә инде такси өсөн түләү - бөтөнләй мыҫҡыл итеү кеүек күренә. Иртәме, һуңмы, чиновниктар өсөн йәмәғәт транспортында йөрөү хаҡын билдәләйәсәктәр. Рәсәй халҡының күпселегенә йәмәғәт транспортындағы юл йөрөү хаҡы чиновниктарҙың эш автомобилдәре хаҡына ҡарағанда нығыраҡ аңлайышлы, тимәк, бәхәс ҡыҙыу буласаҡ", - тип күҙаллай РИА Новости.

Икенсе яҡтан ҡарағанда, ни өсөн чиновниктарҙың юл йөрөү сығымдарын дәүләт ҡайтарырға тейеш? Әллә улар беҙ йәшәгән йәмғиәттә йәшәмәй һәм беҙҙең Хөкүмәткә эшләмәйме икән? Юҡһа, кеше ни тиклем үҙәктән ситтәрәк - провинцияла йәшәй, шул тиклем уның мәнфәғәттәре ситкә ҡуйыла түгелме? Төпкөлдә эш юҡ, эшләйем тип торғанының да ҡул-аяғын бәйләргә, төрлөсә кәртәләр булдырырға ғына тырышалар. Ә бит уйлап ҡараһаң, пенсионерҙар ғүмер буйы ошо уҡ дәүләткә эшләп, тир түгеп, бөгөн уларҙың юл йөрөү өсөн сығымдарының нисә һумын кире ҡайтаралар икән? Был сумма айына хатта мең һумға ла етмәй. Уларға дауаханаға йыш йөрөргә кәрәк. Сөнки ошо дәүләткә бил бөгөп, һаулыҡтарын юғалтҡандар.

Бөгөн хатта провинциялағы чиновниктың эш хаҡы менән провинциялағы ябай хеҙмәткәрҙең эш хаҡын сағыштырып булмай. Ә бит ошо кәмерәк эш хаҡы алған хеҙмәткәр йәмәғәт транспортында йөрөй, уның да сығымдары бар, ул да йәмғиәткә файҙа килтерә, һәр хәлдә, "йөк аты" булып тора. Юҡ, уның сығымдарын ҡапларға ярамай, ул чиновник, йәғни номенклатура түгел һ.б. Ҡыҫҡаһы, Рәсәй тағы ла сираттағы демократия уйынын башламаҡсы. Әммә уның аҙағы нисек тамамланыр, әлегә билдәһеҙ. Һәр хәлдә, һәр осраҡҡа тап килгән оптималь яуап бар ҙа инде: нисек тә яҡшыраҡ булыуын теләгәйнек, һәр ваҡыттағыса килеп сыҡты...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әҙерләне.**

ҺОРАУ - ЯУАП

## ҒӘРИП БАЛАҒА АЛИМЕНТ

**Мин ирем менән гражданлыҡ никахында. Ул тәүге ғаиләһе менән айырылышҡан һәм уның әсәһе менән йәшәүсе ғәрип ҡыҙы бар. Оҙаҡламай уға 18 йәш тула. Бәлиғ булғас, тормош иптәшем уға алимент түләүен дауам итергә бурыслымы, әллә юҡмы?**

-Закон буйынса, атай-әсәй үҙҙәренең эшкә яраҡһыҙ бәлиғ булған балаларын ҡарарға бурыслы. Тимәк, ирегеҙ ҡыҙына алимент түләүен дауам итергә тейеш буласаҡ. Әгәр ҙә түләнәсәк алименттың күләме ике яҡтың килешеүе менән билдәләнмәһә, уның ай һайын түләнергә тейешле күләмен суд хәл итә. Был сумма ике яҡтың да матди һәм ғаилә хәленән сығып билдәләнә. Шуға күрә, әгәр ҙә ҡыҙыҡай теләһә, 18 йәше тулғас та, атаһынан артабан да алимент түләтергә хоҡуҡлы. Тик ул үҙенең алимент алыуға, йәғни атаһы яғынан матди ярҙамға мохтаж булыуын иҫбат итергә тейеш. Ләкин әгәр ҙә гражданлыҡ ирегеҙ ҡыҙының һәйбәт йәшәй алырлыҡ килеме булыуы, ә үҙенең, киреһенсә, аҙ тәьмин ителеүен иҫбат итһә, суд алимент түләү хаҡында кире ҡарар сығарырға ла мөмкин.

## ХАТА ЯҘЫУ БУЛҺА...

**Миңә 54 йәш. Әлеге ваҡытта эшләмәйем, мәшғүллек үҙәгендә иҫәптә торам. Хаҡлы ялға сығыу өсөн документтар йыя башлағайным, хеҙмәт кенәгәмдә атайымдың исеме яңылыш яҙылғанлығы асыҡланды. "Салихьяновна" урынына "Салихяновна" тип яҙылған. Был хата пенсия юллауҙа ҡатмарлыҡтар тыуҙырырға мөмкинме?**

- Ысынлап та, был осраҡта ҡатмарлыҡтар килеп тыуасаҡ. Ләкин Пенсия фонды хеҙмәткәрҙәре һеҙҙең икенсе документтарҙа дөрөҫ итеп яҙылған яҙмаларҙы иҫәпкә алырға мөмкин. Ундай документтар исемлегенә тыуыу тураһында таныҡлыҡ, мәктәпте тамамлау тураһында аттестат, уҡыу йортон тамамлау тураһында диплом, никахҡа инеү тураһында таныҡлыҡ, балаларҙың тыуыу тураһындағы таныҡлыҡтары инә.

Пенсия фондының комиссия ултырышында бөтә документтар ҙа ҡарала һәм уларҙы ҡабул итеү-итмәү тураһында ҡарар сығарыла. Күпселек осраҡта Пенсия фонды хеҙмәткәрҙәре үҙ өҫтәренә яуаплылыҡ алмай һәм ситләтелгән документтарҙы ҡабул итеүгә кире яуап бирәсәк. Был осраҡта судҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ғәҙәттә, суд пенсионер яҡлы була һәм ситләтелгән документтарҙы ҡабул итеү тураһында ҡарар сығара.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йүтәл

❖Күкрәк һөтө имгән йәш балалар өсөн дауа: 1 балғалаҡ балға 2 ҡалаҡ әнис орлоғо һәм бер семтем тоҙ өҫтәгеҙ. Ошо ҡатнашмаға 1 стакан һыу ҡойоп, ҡайнау хәленә еткерергә, һыуытырға. Һәр ике сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсерергә.

❖Ҡара торманы йыуып, өҫкө өлөшөн соҡоп алырға һәм ошо уйымға 2 ҡалаҡ бал һалырға. Торманы берәй һауытҡа вертикаль рәүештә нығытырға, өҫтөн ҡағыҙ менән ҡапларға һәм 3-4 сәғәт тоторға. Көнөнә 3-4 тапҡыр - ашар һәм йоҡлар алдынан 1-әр балғалаҡ эсергә.

❖Кишер һуты менән балды болғап (1:1), көнөнә 2-3 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

❖Аҡ майҙа ҡыҙҙырылған һәм бал өҫтәлгән һуған да йүтәлдән ярҙам итә.

❖2 ҡалаҡ ҡайын бөрөһөн 70 грамм тоҙланмаған аҡ май менән болғатып, утҡа ҡуйып, ҡайнау хәленә еткерергә, әммә ҡайнатмаҫҡа. Һыуына башлағас, һөҙөргә. Ошо майға 200 грамм бал өҫтәп, болғатырға. Көнөнә 4 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға.

❖Йоҡлар алдынан 1 ҡалаҡ аҡ май сәйнәргә, һуңынан 1 ҡалаҡ балды яйлап ҡына сәйнәгеҙ.

❖1 ҡалаҡ бал, лимон һутын, 2 йомортҡаны болғатығыҙ һәм уға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоғоҙ. Көнө буйы сәғәт һайын бер нисә йотом эсергә. Рецепт өлкәндәр өсөн дә, балаларға ла ярай.

❖Ҡара торманы таҙартып, ваҡ ҡырғыстан үткәреп, һутын һығып алырға. 2 өлөш торма һутына 2 өлөш шыйыҡ бал өҫтәргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан 2 ҡалаҡ эсергә. Йүтәл, ҡурылдай, быума йүтәл (коклюш) һәм үпкә туберкулезынан яҡшы дауа.

❖Бойҙай көрпәһе төнәтмәһенә бал өҫтәп, тын юлдары ялҡынһыныуы ваҡытында эсәләр.

❖1 ҡалаҡ киптерелгән үгәй инә үләне (мать-и-мачеха) япраҡтарына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Һыуытырға, һөҙөргә һәм 1 ҡалаҡ бал өҫтәргә. Көнөнә 2-3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Оҙайлы йүтәлдән ҡотҡара, йүтәлде йомшарта.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ТУЙ ЙОЛАҺЫ

**Ҡалын туй шулай уҡ төрлө йолалар менән үткәрелгән. Улар, башлыса, йәш киленде яңы туғандары менән таныштырыу, ул яңы урынға күнегеп китһен өсөн башҡарылған.**

Киленгә һыу юлын кейәүҙең ҡыҙ туғандары күрһәткән (һыу башлатыу). Биҙәлгән көйәнтә һәм биҙрәләр тотоп, шишмәгә һәм ҡоҙоҡҡа барғандар. Унда килен кеше: "Һыу юлдарым оҙон булһын, ғүмеркәйем аҡкан һыуҙай саф һәм таҙа булһын", - тип, һыуға тәңкә ташлаған һәм шул рәүешле һыу эйәһенән рөхсәт алған. Иренең өлкән йәштәге берәй туғаны был ваҡытта: "Киленде тотма, тәңкәне тот!" - тип ҡыскырған. Бынан һуң килен битенҡулын йыуған, ҡыҙ-ҡырҡынға йөҙөк, ҡулъяулыҡ-таҫтамал, малайҙарға бәке тараткан. Улар иһә йәш киленгә тәңкәләр бүләк иткән, уның һыуҙы нисек алыуын, нисек алып ҡайтыуын баһалаған. Был һыуҙан байрам сәйе ҡайнатылған. Шифалы, тип иҫәпләнгәнгә күрә, ҡунаҡтар сәйҙе һатып алып эскән. Ошо табында килендең бирнәһе, бүләктәре, күстәнәстәре ҡаралған, шуға ла уны ҡайһы бер яҡтарҙа күренеш сәйе, ҡалын йыуасаһы йәки сәксәк сәйе тип йөрөтәләр. Килен ҡунаҡтарға түшелдерек, һарыуыс, ҡашмау, янсыҡ тараткан, ҡунаҡтар уға аҡса, мал әйткән. Әгәр ҙә күренеш сәйендә килен үҙе лә булһа, килен һөйөү йолаһы башҡарыла. Кейәүҙең туғандары килендең башынан һыйпап, уға теләктәр әйткән, бүләк биргән. Бигерәк тә күп балалы ҡатындар бүләк иткән ҡортбаш юғары баһаланған.

*Түлле, түлле, түлле бул,*
*Буҙәнәләй түлле бул!*
*Уллы бул, ҡыҙлы бул!* - тип, көйләп теләк теләнгән.

Көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттарында тағы бер ҡыҙыҡлы йола һаҡланған. Ул һаба ашы тип атала. Ирҙәр һәм ҡатындар ике төркөм туплап, өй һайын йөрөп, ризыҡ йыйған. "Тамаҡ туймағандан түгел, Әңгәмә өсөн йыябыҙ, Әңгәмә ҡорабыҙ, һыйланабыҙ, уйнап алабыҙ", - тип, йоланың маҡсаты ла билдәләнгән. "Һаба йыйырға сығайыҡ, тәп ҡоҙанан башлайыҡ", - тип, йолала ҡатнашыусылар ҡоҙа йортон да ситтә ҡалдырмаған.

*Ҡаҙы бирһәң - тәртә төбөн*
*йомшартыр.*
*Май бирһәң - ҡабырғаны йомшартыр.*
*Бал бирһәң - тамаҡ төбөн сылатыр,*
*Сәй бирһәң - йыр йырлатыр,*
*Ит бирһәң - ирәйеп ятыр,* - тигән әйтемдәр был йолала киң ҡулланылған. Йола тамамланғас, йыйылған ризыҡты алып, берәй йортҡа киткәндәр йәки ҡоҙа йортона ҡайтҡандар һәм табын ойоштороғандар.

Ҡалын туйҙың аҙағында хушлашыу ашы һәм традицион булған ҡот сабыу йолаһы үткәрелгән. Туйҙан һуң ҡыҙ-ҡырҡын килен сәйе ойоштороған. Туй йолалары 1 йылдан һуң кәләштең ире менән бергәләп ата-әсәһе йортона ҡунаҡҡа барыу менән тамамланған. Ул түркен барыу тип аталған. Йәштәрҙең килеүенә мал һуйғандар, кейәү алып килгән балдан бал ҡойғандар. Был бал түркен балы тип йөрөтөлә.

**Эльза МИҺРАНОВА.**
**"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

**Белгән белгәнен эшләр, белмәгән беләген тешләр, ти халыҡ мәҡәле. Донъялар боларып, баҙар балтаһы уңлы-һуллы киҙәнә, үҙ хакимлығын итә башлағас та, ҡәҙимгесә генә йәшәп, өйрәнгән колхоз-совхоз эшенән башҡаны белмәгән беҙҙең ауыл халкы албырғап ҡына түгел, аптырап ҡалды. Балалар баҡсаһындағы апайҙарының етәгенә өйрәнгән ише гел "үрҙән нимә әйтәләр"гә генә күнеккән, мейеһен күптән көрсөктән сығыу юлдарын эҙләүҙән арындырған кешегә матди яктан бикәр рухи туҡмаҡ ысын мәғәнәһендә биҙа булды.**



# КӘСЕП БЕЛГӘН - БӨЛМӘҪ

Кемдәр был һынылыш осорон уңышлы сыкты, тиһегеҙме? Юҡ, кеҫәһендә аҡсаһы булғандар түгел, һөнәр-кәсебе булғандар. Эйе, һөнәрле үлмәҫ, һөнәрһеҙ көн күрмәҫ, тиҙәр бит. Быуаттар аҡылын туплаған ошо мәҡәл ысынбарлыҡ булып алдыбыҙға баҫты: кем солоҡ яба, умарта тота, кемдә эшҡыуарлыҡ ҡаны уйнай, кем мал аҫрай, ергә эйелә, йәғни йәшелсә үҫтерә, кем балта тота, йәғни ағас-таш менән булыша - шулар мандыны, үтә состар ауыл байы булып танылды. Бөгөн бер быуын заман эшҡыуарҙары барлыҡҡа килһә, халҡыбыҙҙың боронғо кәсеп-шөғөлө арҡаһында сереп үк байымаһа ла, ғаиләһен ярайһы уҡ йәшәткәндәр - урта ҡулдар, дәрәсәрәге, алтын ҡулдар бар. Һәм быға шөкөр итерлек. Иң мөһиме, нәҡ ошондай ауыл оҫталары киләсәк быуынға - балаларға кәсеп-шөғөл өйрәтеп ҡалдырыусы, ниндәй заман тыуһа ла баҙап-юғалып ҡалмаҫҡа өйрәтеүсе. Ысын мәғәнәһендә тере кәсепселек һандалы, хазина инде.

Әйткәндәремә миҫал итеп Бөрйән районы Ғәлиәкбәр ауылын килтермәксемен. Янығаҡ улар өлгөһө менән республиканың Урал арьяғы райондары педагогтары ла танышып китте. Ғәлиәкбәр мәктәбенә "Үҫеп килеүсе быуынды халыҡ йолалары һәм гөрөф-ғәҙәттәре өлгөһөндә тәрбиәләү, халыҡ кәсептәрен тергеҙеү, үҫтереү һәм һаҡлау - бөгөнгө көн талабы" тигән темаға арналған семинар-кәңәшмәгә йыйылғайнылар ул көндө. Ғәҙелгәрәй мәктәбе Иҫке Собханғол урта мәктәбенең филиалы булһа ла, собханғолдарға әле көнләшергә генә ҡала - бына тиғән матур, заманса бинала уҡып ятыуҙары. Мәктәп тыштан да, эстән дә ялтырап тора.

Йыйын-фәлән үткәргәндә ғәлиәкбәрҙәр мах биреп тораһы халыҡ түгел. Балыҡ башынан серей, тигәндә замансалаштырғанда, эш башлыҡтан тора шул. Ауыл хакимиәте башлығы Иҙел Ағзам улы Әминев үҙе бөтә сараның уртаһында булды: асыҡ дәрестә лә ҡатнашты, уйын-көлкөнөң дә уртаһында йөрөнө. Тарих, тип йән атҡан, туған мәктәбе өсөн генә түгел, тотош район өсөн баһаһыҙ эштәр башҡарыусы тарихсы-эҙәрмән Дамир Аллабирҙиндың эшмәкәрлеге менән танышыу үҙе генә лә ни тора: экспонаттарға бай тыуған яҡты өйрәнеү музейы, ул төҙөгән шәжәрә ағасы, топонимика буйынса, район әүлиәләре хаҡында әҙерләнгән материалдары - минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе тип ябай дәрес биреп йөрөүселәргә үҙе бер матур үрнәк.

Семинар-кәңәшмәнең иң матур өлөшө барыбер ҙә Ғәлиәкбәр оҫталарының ижади оҫтаханаларында булыу, уларҙың эш тәжрибәһе менән уртаҡлашыу, ысын мәғәнәһендә ижад донъяһына сумыу булғандыр. Ойоштороусылар сараға билдәләнгән ваҡыт үткәс тә халыҡты оҫталарҙан айырып ала алмай йөҙәне. Ауыл имамы Сабитов Самат ағайҙың ереле-ваҡлы батмандары, семәрле ижауҙары, ҡап ҡорһаҡлы көбөләре үҙе ни тора! Бер ситтә балаҫ һуғып күрһәтһәләр, икенсе урында әлеге лә баяғы Дамир Зиннәт улы 8-се синыф уҡыусыһы Юлай Сәғитов менән **(һүрәттә)** септә һуға, ҡорама ҡораусыһы ла, ҡүҙ яуын алырлыҡ түшәк-балаҫтар, диван япмалары бәйләүсеһе лә бар. Ғәбитова Шәкирә апайҙың ҡорамалары, Байморатова Таңһылыу апайҙың түшәк-япмалары, Исламбаева Хәснә апайҙың йәйгор төҫлө тирүгә-балаҫтары, Ғүмәрова Резеда апайҙың ҡыҙы менән станокта һуҡҡан ултырғыс түшәктәренең матурлығын тасуирлар һүҙ юҡ. Мәктәптә балаларға умартасылыҡ нигеҙҙәрен өйрәтеүсе Ишмөхәмәтов Марстың үҙ ҡулдары менән эшләгән солоҡсолоҡ ҡорамалдары, шулай уҡ бал ҡортона бәйле докторлыҡ диссертацияһы яҡларлыҡ ғилем-аҡылға эйә ауыл аҡһаҡалы Дилмөхәмәтов Кәбир бабайҙарҙың күргәҙмәһенә халыҡ балға йәбешкәндәй һырыны.

Бөгөнгө баҙар иҡтисады ауылдарҙың алҡымынан быуып алып барғанда Ғәлиәкбәр ауылындағы халыҡтың бына шулай үҙ донъяһын хәстәрләп, ата-бабалар шөғөлөн ныҡлап тергеҙеп, заман һынауҙарына бирешмәй йәшәп ятыуы күптәргә өлгө булырлыҡ шул. Эйе, бында халыҡ умартасылыҡ, солоҡсолоҡ менән булышып ҡына ла баймаңлыҡта ирәйеп йәшәп була икәнен үҙҙәренә лә, башҡаларға ла раҫлаған. Шуға ла ауылда үткән әлеге сараның фәтеүәһе, маҡсаты, рухы, йәне булды.

**Айһылыу ҒАРИФУЛЛИНА.**



ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

# ИНГУШ МЕНӘН БАШҠОРТ АРАҺЫ...

**Руслан Мөхәмәт-Бәшир улы Плиев Башҡортостанға 1999 йылда уҡырға килә. Башҡорт дәүләт университетын тамамлағандан һуң, үҙ эшен асып, республикала йәшәргә ҡала. Республикала йәшәү осоронда башҡорт халҡының мәҙәниәте, тарихы менән ныҡлап таныша, күп районддарҙы йөрөп сыға.**

-Башҡортостанда күп яҡшы күренештәргә тап булдым, - тип һөйләй ул. -Йәҙҙән ашыу милләт вәкилдәре йәшәүенә ҡарамаҫтан, бында милләт-ара ыҙғыштарға юлыҡманым. Бер тапҡыр ҙа "Башҡортостан - башҡорттар өсөн!" лозунгыһы аҫтында аҫаба халыҡтың башҡа халыҡтарға ҡарата нәфрәтен күҙәтмәнем. Икенсе төбәктәрҙән килгән кешеләргә лә мөнәсәбәт яҡшы, һәр кем ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тора.

Мине башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте ҡыҙыҡһындыра. Бигерәк тә тел өлкәһе бик ҡыҙыҡлы тойола. Республиканың төрлө райондарында булғанымда күп кешеләр менән аралашырға тура килде. Башҡорт теленең төрлө диалект һөйләштәре менән таныштым, башҡорт һәм ингуш телдәрендәге бер тамырлы һүҙҙәргә, йәғни меңәр йылдар буйы үҙгәрмәгән тоҙ, икмәк, һыу кеүек һүҙҙәрҙең оҡшаш булыуына иғтибар иттем. Шундай бер нисә йөҙ һүҙе атай алам.

Башҡорт менән ингуштар йәшәгән территориялар бер-береһенән 2400 саҡрым тирәһе. Тарихтың беҙгә билдәле осоронда ла халыҡтарҙың үҙ-ара аралашып йәшәүе хаҡында мәғлүмәттәр билдәле түгел. Әммә тап башҡорт теле менән ингуш теле араһында бер үк лексик мәғәнәле һүҙәр булыуы ҡыҙыҡ. Ике телдең дә нигеҙен тәшкил иткән һыу, икмәк, тоҙ һүҙҙәренә таянып (икмәк - мякх, һыу - хи, тоҙ - тух, яҙ - язди), уларҙың оҡшашлығын һәм артабан тәрән өйрәнелергә тейешлеген күҙ уңында тотоп, Башҡортостан һәм Ингушетия тарихсылары, тел белгестәре ике милләттең тарихи уртаҡлығын тәрәнерәк өйрәнһен ине, тигән теләк белдерәм.

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

**Нуғай юлындағы көнбайыш ҡатайҙар башҡорт халҡы тарихында һиҙелерлек эҙ ҡалдырған. Бигерәк тә был XVII - XVIII быуаттарҙа башҡорт яуҙары ваҡиғаларында асыҡ сағыла. Был мәҡәләмдә башҡорт халҡының артабанғы йәшәйешенә ҙур йоғонто яһаған 1735 - 1740 йылдарҙағы яуҙың һуңғы осоро - 1740 йыл миҫалында башҡорт ихтилалдарында ҡатайҙарҙың ҡатнашыуын асыҡларға теләнем.**

# ҠАТАЙҘАР ҠАРАҺАҠАЛ ЯУЫНДА



## 1740 йылға тиклемге ваҡиғаларға байҡау

1737 йылда ихтилалды баҫтырыусы етәкселәр алмашына. Румянцевты алмаштырған Хрущев урынына генерал Соймонов тәғәйенләнә, мәрхүм Кириллов урынына В. Н. Татищев килә. Яңы етәкселек элеккеһен хаталарҙа ғәйепләй. Мәҫәлән, Хрущев башҡаларҙың кәңәшенә ҡолаҡ һалмай ҡабул иткән ҡарарҙары менән яңы баш күтәреүҙәргә килтерҙе, ти Татищев (Татищев әсирҙәрҙе көслө ҡарауыл аҫтында тоторға, ә язаламаҫҡа кәрәклеген иҫкәртһә лә, Хрущев ҡаты саралар ҡуллана, бөтә сараларҙы тормошҡа ашырыуға уны Төрөк һуғышына ебәреү генә ҡамасаулай). Соймонов сентябрь айында тауҙарҙағы баш күтәреүселәргә ҡаршы походты үҙе етәкләй. Ул Табынскийҙан Алатау, Ҡалыу, Башты, Юрми тауҙарын үтеп, Ағиҙел үренә сыға, тик баш күтәреүселәр Ағиҙел аша сығып өлгөрәләр. 18 сентябрҙә тауҙарҙа тороп ҡалған баш күтәреүселәр һәм капитан Гольчин отряды араһында һуғыш була. Ҡалыу тауындағы һуғыш өс сәғәт дауам итә, 81 кеше үлтерелә. Был һуғышта яҡын-тирә улыстарҙан (Нуғай юлының ун биш улысынан) мең ярым кеше ҡатнаша. Баш күтәреүселәр араһында Иҙел-Ҡатай һәм Инйәр-Ҡатай улыстары ла була (6-сы т., 483-сө бит). Көҙгә хәрәкәт дөйөм һөжүмгә әүерелә алмайынса, һүнә. Декабрь башында баш күтәреүселәрҙең ҡайһы берҙәре баш һала башлай. Кәлсер-, Дыуан-, Кесе-, Ҡумрыҡ-, Ҡара-Табын улыстары, Ҡарағай-, Сәнкем-, Бошман-Ҡыпсаҡ улыстары, Ҡыуаҡан, Бөрйән, Юрматы, Түңгәүер, Күбәләк улыстары башлыҡтары менән Ҡатай улысынан Аҡҡусҡар бей ҙә баш һала. Декабрь аҙаҡтарында Өфө воеводаһы А. И. Алфимовҡа Тамъяндан - Сәйетбай һәм Рысабай, Кәлсер-Табын улысынан - Килдеш сәсән, Юрматынан - Мортаза, Дыуандан Солтан һәм дә Ҡатайҙан Күсекәй яҙған хатты тапшыралар. Ул хаттан башҡорттарҙың воевода уларға ебәргән дүрт кешенең килеп етеүен бик тә ыңғай ҡабул итеүен, шул уҡ ваҡытта Әбелхәйер хандан да Ҡарабай исемле вәкил ебәрелеүен һәм уның да властар менән дә, Әбелхәйерҙең үҙе менән дә башҡорттарҙы яраштырырға килеүен белергә була. Яу етәкселәре Алфимовҡа, "беҙ императрица ғали йәнәптәре ҡанаты аҫтынан баш тартырға уйламаныҡ, бының өсөн беҙҙе битәрләмәгеҙ", тип яҙа. Шул уҡ ваҡытта, "...беҙ Килмәк һәм Аҡайҙы, Абдулла һәм Йосопто иреккә сығарыу тураһында указ сыҡҡан тип тә ишеткәйнек, әммә уларҙы иреккә сығармай тороп, башҡорттарҙың береһе лә был хәбәргә ышанмай", тип өҫтәйҙәр. Уға тиклем улар тотҡондағы яу етәкселәренән хаттар алған була. Килмәк, Аҡай, Абдулла, Йосоп яу етәкселәренә, "беҙ бында һеҙҙең һаман да тынысланмауығыҙ арҡаһында тотҡонлоҡта ятырға мәжбүрбеҙ, әгәр ҙә Аллаға тапшырып, бөтә гонаһтарығыҙҙы ярлыҡауҙы һорап, батшабикәбеҙ ғали йәнәптәренә баш эйһәгеҙ, Ҡөрьән үбеп, яңынан антҡа килтерелһәгеҙ, беҙгә лә еңеллек килер ине", тип яҙалар (еңеллек, әлбиттә, килмәй - улар язалап үлтерелә (6-сы т., 349-350-се биттәр). Ошондай хатты ҡатайҙарҙан Йәнебәк тә ала.

Бында ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйерҙең хыянатын да иҫкә алып китергә кәрәк - ул рус властары һәм башҡорттар араһында ҡойроҡ болғап (батша властарына - башҡорттарҙы тынысландырасаҡмын, ә башҡорттарға - властарҙан еңеллек һораясаҡмын, тип вәғәҙә итә), хәрәкәткә ҙур зыян килтерә. Хәрәкәт тик киләһе йылдың яҙында ғына яңыра. Ҡаҙан юлы Гәрәй улысынан Әбләғужа Йәнғужин һүҙҙәренә ҡарағанда, баш күтәреүселәр ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйер менән һөйләшеүҙәрҙе яңыртырға тырышып ҡарай. Әммә башҡорттар рус властарына ышанмауҙарын белдерә һәм Әбелхәйер Ҡатай улысына йүнәлә (6-сы т., 550-се бит). Юл ыңғайы Ҡыр Көҙәй улысында ла булып, уларҙы властар менән яраштырырға маташҡандан һуң, ул Ҡатай улысына килеп, Аҡҡусҡар бей ауылында урынлаша. Ҡаҙаҡтар менән бәйләнеш булдырырға тырышыу 1736 йылда уҡ башланған булһа ла, үрҙә әйтелгәнсә, был файҙа килтермәй. Шулай ҙа яу етәкселәре ҡаҙаҡтар менән бәйләнештең бик мөһим икәнлегенә халыҡты ышандырырға тырыша. Был эштә ҡатайҙарҙан Аҡҡусҡар бей ҙә тырышлыҡ күрһәткәне аңлашыла артабанғы документтарҙан. Ҡатай Яныбай янындағы кәңәшмәлә Алдар Иҫәнгилдин яу етәкселәрен баш һалырға, штраф аттарын Табынскийға алып барырға өгөтләүенә Аҡҡусҡар бей риза булған кеүек тороп ҡалһа ла, ул китеү менән яуҙы дауам итергә була, Сәйетбай Алкалин менән берлектә ҡаҙаҡтар менән килешеүҙе яңыртырға, ҡалмыҡтар менән дә бәйләнеш булдырырға килешәләр. Әммә 1738 йылда хәрәкәт киң йәйелеп китә алмай.

Яу барышында даими рәүештә властар яҡлы булып ҡалған түрәләр ҙә була. Мәҫәлән, ҡатай Булат Йәлекәев тә - шундайҙарҙың береһе. Ул властарға даими рәүештә баш күтәреүселәр тураһында хәбәрҙәр еткереп тора, үҙенең кешеләре менән баш күтәреүселәргә ҡаршы көрәшә. Властарға еткергән бер хәбәрендә ул, "намерение имеют башкирцы подлинно, чтоб, нынешним летом собрався, вырубить живущих близ Табынска верных башкирцов старшину Полата и сотника Якупа и протчих иноверцев", ти (6-сы т., 619-сы бит). Шулай ҙа власть яҡлы кешеләр аҙыраҡ булғанға оҡшай. Быға миҫал итеп түбәндәге донесениены килтерергә була. Татищев ҡушыуы буйынса Собханғол Ураҙов исемле берәү Нуғай юлы Ҡатай улысына 1739 йылдың яҙында бында йәшәгән сыуаштарҙы казак отрядына яҙҙырырға килә. Шунда ул Ҡоҙашман исемле башҡорттан Ҡатай улысы һәм башҡа улыстарҙың йәйгә баш күтәрергә йыйыныуын белә. Ҡоҙашман тағы ла уның өйөндә тимерселәр һөңгөләр һәм уҡ башаҡтары эшләүен дә әйтеп, ошоларҙы өҫтәп ҡуя: "Хотя кузнецов у них выводят, но у них де кузнецов много..." Һуңынан ул, әгәр тимерселәрҙе тоторға килеүселәр булһа, барыһын да үлтерәсәкбеҙ, тип тә иҫкәртә. Ҡоҙашман Алдар Иҫәнгилдиндың да йәйге сығышҡа ризалығын, рустарҙың, штраф аттары алһалар ҙа, һәр саҡ башҡорттарҙы ҡыҫыуҙарын әйтә. Май урталарында, Булат Йәлекәев хәбәр итеүенсә, Нуғай һәм Себер юлы улыстарында баш күтәреүселәр, иллешәр кешелек төркөмдәргә бүленеп, ауылдар буйлап көрәшкә күтәрелергә өндәп йөрөй башлайҙар. Шул уҡ ваҡытта Тубыл йылғаһы үрендә ҡаҙаҡтар күпләп туплана, уларҙың башҡорт улыстары буйлап 20, 30, 40 кешелек төркөмдәр менән йөрөп ятыуҙары тураһында хәбәрҙәр ишетелә, әммә ҡалмыҡтар менән дә, ҡаҙаҡтар менән дә ныҡлы бәйләнеш булдырырға тырышыу һөҙөмтә бирмәй. Нуғай юлының "баш буры" Сәйетбай Алкалиндың Табынский тирәһендә хәрәкәт итеүе, генерал Соймонов уның менән һөйләшеүгә Рысай байҙы ебәреүе тураһында май-июнь айҙарындағы документтан белеп була. 16 июлдә "тоғро" татар Ибрай Әхмәтов Ҡатай улысында (Аҡҡусҡар байҙың янында булырға тейеш) үткән йыйында биш йөҙләп башҡорт, утыҙлап ҡаҙаҡ ҡатнаша, тип хәбәр итә. Тик был ҡарарҙар һүҙҙә генә тороп ҡала. Был йылда ла хәрәкәт киң йәйелә алмай, әммә башҡорттар халыҡ иҫәбен алыу кампанияһын өҙөүгә өлгәшәләр.

**Ринат ШӘЙБӘКОВ,**
**Белорет районы Зөйәк урта мәктәбенең тарих уҡытыусыһы.**

**(Дауамы. Башы 29-сы һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Торлаҡ һәм ҡаралтылар

Аҙыҡ-түлек һәм хужалыҡ кәрәк-ярағын һаҡлау өсөн төҙөлгән келәт тә ашханаға оҡшаш. Урынына ҡарап уны таштан (таш келәт), самандан (саман келәт), талдан (ситән келәт) үреп яһайҙар йәки бүрәнәнән һалалар. Келәттең артыҡ бер үҙенсәлеге лә юҡ. Әгәр ул таштан йәки самандан булһа, стенаһы ошо уҡ материалдан булған өйҙөкө кеүек күтәрелә, әммә балсыҡ менән ныҡлы итеп һыланмай. Уларҙың иҙәне һәм түбәһе булмай; ҡыйығы, ғәҙәттә, тупраҡ, һалам йәки ҡатламлы таштан ябыла.





Тәҙрәһе юҡ, ишеге һәр саҡ бер яҡлы һәм эскә асыла. Ситән келәт (һүрәттәр) ҡайһы бер ваҡыт эске яҡтан һылана. Ҡыйығы һаламдан йәки кәҫтән ябыла. Ситән келәт тә, бура келәт тә бик йыш оҙон келәткә әүерелә.

Оҙон келәт бурап һалынған йорт кеүек үк, әммә уның нигеҙе булмай һәм матур итеп мүкләнмәй. Иҙәненә таҡта йәйелә, бик йыш түбә лә һалына, ҡыйығына йоҡа таҡта йәки һалам ябыла. Уларҙа, ғәҙәттә, ашлыҡ һәм он һаҡлана.

Келәт һәм оҙон келәттән тыш башҡорттар махсус япма - тупалыҡ та эшләй. Уның аҫтына арба-сана, ҡура, малға аҙыҡ-түлек һ.б. кәрәк-яраҡ ҡуйыла.

Башҡорттарҙың бер төрлө генә формала ҡабул ителгән ихатаһы юҡ. Уның майҙаны, кәртәләү ысулдары, торлаҡ һәм башҡа ҡаралтының төҙөлөшөн һәр кем үҙенсә башҡара. Шулай ҙа башҡорт урамының дөйөм үҙенсәлекле һыҙаты булып уның ҙур майҙанлы булыуы тора. Башҡорт ярлы булғанда ла, уның йорто бәләкәй генә булғанда ла, йорт ҡаралтыларынан бәләкәй генә келәт йәки оҙон келәт торғанда ла, урамы һәр ваҡыт киң һәм иркен, ситән йәки ҡойма менән уратылған. Йәйгеһен унда үлән үҫә. Бер урам артында икенсеһе, хатта өсөнсөһө лә була. Һүрәттә (А, Б, В - беренсе, икенсе,



өсөнсө урам; а - ситән келәт, б,к - сыуал, в - ситән тупалыҡ, г - һыйыр араны, д - ат араны, е - бесән кәртәһе, ж - саман өй, з - күтәрмә, и - ситән солан, л - урындыҡ, м - баҡса, н - тәрәтхана) урта хәлле башҡорттоң урамы планы күрһәтелгән. Бындай урам көнсығыш Башҡортостан өсөн хас.

Икенсе план үҙәк Башҡортостандан алынды (һүрәт). Унда А- урам, Б- аҙбар, В - баҡса, а - өй, б - солан, в, ж - тупалыҡ, г, е - лапаҫ, д - ҡура, з - мунса.



Башҡорттарҙың йорт-ҡаралтыһын һүрәтләгәндә мунсаны ла онотторға ярамай. Ул ҡара һәм аҡ мунсаға (әүнә) бүленә. Аҡ мунса, ғәҙәттә, байҙарҙа ғына була. Төрлө ерҙә мунсалар һаны төрлөсә. Ҡайһы бер урында улар урам һайын булһа, ҡайһы берҙә тотош башҡорт дачаларында бер генә мунса ла юҡ.

***✓ Якутск ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы Айсен Сергеевич Николаев та, уның командаһындағы башҡа чиновниктар ҙа - милли кейемдә. Аҫаба халыҡҡа ҡарата булған оло ихтирам билдәһе итеп ҡабул иттем мин был күренеште.***

# Мәңгелек боҙ

## аҫыл башҡорт балалары

**Халҡыбыҙҙа "Йөрөгән аяҡҡа йүрмә эләгә" тигән бик матур мәҡәл бар. Шуға ла төрлө төбәктәргә эш сәфәре менән сығырға тура килһә, ошондай мөмкинлек тыуыуға ҡыуанып бөтә алмайым. Башҡа халыҡтарҙың көнкүрешен, хәл-әхүәлдәрен күреп-белеп ҡайтыу күп нәмәләр тураһында фекер тупларға, сағыштырыуҙар үткәрергә, булғандың ҡәҙерен белергә, ә инде булмағандың булдырыу юлдарын эҙләргә өйрәтә. Әле яңыраҡ, 28-29 июндә, Саха-Яҡут Республикаһында уҙғарылған "Ысыах Туймаады" байрамында ҡатнашыу бәхете тейгәйне. Шул сәфәремдәге күҙәтеүҙәрем, тәьҫораттарым менән ихлас күңелдән уртаҡлашҡым килгәндән яҙам был юлдарҙы.**

### "Уруй-айхал!"

Сахаларҙың был милли байрамы II Бөйөк Ватан һуғышы башланғанға тиклем гел 22 июндә, көн менән төн тигеҙләнгән ваҡытта үткәрелеп килә торған булған. Хәҙер 10-28 июнь арауығындағы ял көндәрендә үткәрелә. Ысыах - яҡуттарҙың Яңы йылы, йәғни ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа килгән йәйҙе ҡаршылау, күк тәңреләре һәм улар йөҙөндә тәбиғәткә табыныу һәм халыҡтың иң изге теләктәрен еткереү йолаһы ул. Был байрам йыл һайын республиканың төрлө төбәктәрендәге изге урындарҙа уҙғарыла. Быйылғы Ысыахты асыу тантанаһында йәмғеһе 1500 кешене үҙ эсенә алған үҙешмәкәр сәнғәт коллективтары ҡатнашты. Ике көн дауамында тамашасыларға төп сәхнәлә һәм тиҫтәнән ашыу сәхнә майҙансыҡтарында 77 төрлө байрам программаһы тәҡдим ителде. Бер нисәүһен генә һанап үтәм: ат сабыштырыу, көрәш, яҡут аш-һыуын әҙерләүселәр конкурсы, Себер халыҡтары йолалары фестивале, милли кейем, яҡут һылыуҡайҙары конкурстары, милли кәсептәр күргәҙмәһе, имселәр майҙансығы, "Олонхо" яҡут халыҡ эпосын һөйләүселәр конкурсы. Һәр ысыахта мотлаҡ рәүештә башҡарыла торған йолалар ҙа бар. Мәҫәлән, Осуохай бейеүе. Майҙандағы барса кешеләр бер нисә ҡат түңәрәк яһап, ҡояш әйләнәһе буйынса өйөрөлә. Ғүмер әйләнәһен сағылдырған түңәрәктә ҡулға-ҡул тотоношоп бейегән халыҡ шул рәүешле бер-береһенә ыңғай энергетикаһын өләшә.

Ә инде майҙандағы бар халыҡтың таң менән теҙелешеп баҫып, ҡояш ҡаршылауы иң төп йолаларҙың береһе булып тора. Ҡояштың тәүге нурҙары бөтә тереклекте уятыусы һәм таҙалаусы юғары көскә эйә, тип иҫәпләй сахалар. Ҡояшты барыһы ла теҙелешеп баҫып, ҡулдарын күтәреп, сәләмләп, алғыш менән ҡаршы ала. Ғөмүмән, был байрамда алғыш көн дауамында яңғырай, ошолай итеп байрамға йыйылған барса халыҡтың биоэнергетикаһы таҙартыла, фатиха еткерелә. Ҡыҙыҡ, ниндәй көскә эйә икән ул шамандарҙың яҡут телендә яңғыраған алғыштары? Һүҙҙәрен аңлар-аңламаҫ (улар ҙа төрки телле халыҡ) тыңлаһаҡ та, йөрәктәргә үтеп ингән кеүек була! Ниндәй теләктәр теләгәндәрен дә яҡынса тойомлаған кеүекбеҙ: донъяларының именлеген, халыҡтарының түллелеген, милләтенең ҡеүәтен, телдәренең ҡөҙрәтен теләп ялбарҙы улар үҙ Тәңреләренә! Күҙҙәрҙән йәш ағыҙған ошо алғыштарҙы майҙандағы меңәрләгән халыҡ ҡабат-ҡабат: "Уруй-айхал!" - тип йөрәкһенеп ҡеүәтләне. Изге урында күмәкләп теләнгән теләктәр ысынлап та ҡабул булыр, иншаллаһ! Беҙ ҙә, Рамаҙан айында юлға сыҡҡан башҡорт мосафирҙары, ғәзиз атайсалыбыҙға ҡарата шул уҡ теләктәрҙе теләп, эстән генә амин тоттоҡ.

### Һәр халыҡтың милли йөҙө була!

Сәфәргә йыйынғанда ойоштороусылар: "Үҙегеҙҙең милли кейемегеҙҙе лә алып килергә онотмағыҙ. Байрам көндө беҙ барыбыҙ ҙа милли кейемдә генә йөрөйәсәкбеҙ", - тип алдан иҫкәртеп ҡуйғайны. Ысынлап та шулай булып сыҡты. Ысыахҡа йыйылған барса халыҡ, ниндәй генә милләттән булмаһын, барыһы ла яҡут милли кейемендә йөрөй ине. Уның төрлөлөгөнә хатта күҙҙәр ҡамашып китә. Сәхнә өсөн тектерелгән кейемдәр түгел шул былар. Уларҙы һәр кем үҙ мөмкинлегенән сығып, үҙ зауығына ярашлы итеп тектереп алған. Якутск ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы Айсен Сергеевич Николаев та, уның командаһындағы башҡа чиновниктар ҙа - милли кейемдә. Аҫаба халыҡҡа ҡарата булған оло ихтирам билдәһе итеп ҡабул иттем мин был күренеште. Тағы шуныһы ҡыҙыҡ: бер юлы тиҫтәнән ашыу сәхнә майҙансыҡтары эшләне, әммә бер ерҙә лә башҡа халыҡтар телендә яңғыраған йырҙар ишетелмәне. Яҡутстанда ике дәүләт теле иҫәпләнһә лә тирә-йүндә тик яҡут моңдары ғына яңғырауы йәнде иркәләне.

"Бынан ун йылдар элек Саха-Яҡут Республикаһының баш ҡалаһында яҡуттар бик аҙ ғына ине. Элекке президентыбыҙ Михаил Николаев тырышлығы менән һәр сәнәғәт предприятиеһында өҫтәмә эш урындары булдырып булһа ла, ауылдарҙан аҫаба халыҡ вәкилдәрен күсереп килтереп, эшкә алдылар. Мәктәпте тамамлаған һәләтле яҡут балаларын ауылдар буйлап эҙләп алып, кәрәкле һөнәрҙәргә уҡыттылар, юғиһә, үҙебеҙҙең сәнәғәт предприятиеларында ла юҡ кимәлендә ине яҡуттар", - тип һөйләне беҙгә аралашҡан кешеләр.

Ғөмүмән, үҙ халҡын һаҡлап ҡалыр, уны пропагандалар өсөн сахалар төрлө алымдар ҡуллана. Ошо йыл да үткәрелеп килгән Ысыах байрамында ла Гиннесстар китабына индерерлек рекордтар ҡуйып, үҙ милләтен донъя кимәлендә танытырға тырыша улар. Быйыл иң күп ҡымыҙ эсеү буйынса рекорд ҡуйылды. Ҡымыҙ эсеүселәр һаны 11 136-ға етте. Ә бит конкурстың тағы бер төп шарты: ҡымыҙ эсеүселәр барыһы ла милли кейемдә булырға тейеш ине! Байрамға үҙебеҙҙең милли кейемде кейеп барғас, беҙгә лә хөрмәт йөҙөнән конкурста ҡатнашырға рөхсәт иттеләр. "Гиннесс рекорды ҡуйыуҙа ҡатнашты" тип, инглиз телендә яҙылған киң таҫма һалып ҡайтарҙылар яурыныбыҙға. Әйткәндәй, ошо ике көн дауамында барған байрамда мин бер генә лә эсеп-иҫереп йөрөгән кешене күрмәнем. Рәсми ҡабул итеү мәжлестәрендә лә, башҡа урындарҙа ла халыҡ бары тик ҡымыҙ эсеп күңел аса ине.

Ә шулай ҙа үҙебеҙҙең ҡымыҙ күпкә тәмлерәк икән шул! Оҙаҡ йылдар Яҡут-Саха Республикаһында табип булып эшләп, әле тыуған яғыбыҙға ҡайтып төйәкләнгән Наил Вәлийән улы Хәйруллин: "Башҡорт ҡымыҙының рецебын һорап бер булалар инде яҡуттар, әйтмәйем, әйҙә, үҙебеҙҙең милли серебеҙ булып ҡалһын!" - тип юҡҡа ғына мәрәкәләмәгән икән.

Сәфәрҙәштәремдең береһе Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы, медицина фәндәре докторы, танылған хирург Марс Тимербулат улы Юлдашев та алтмышынсы йылдар башында Якутскийҙа йәшәгән. 50 йылдан һуң йәшлек эҙҙәрен килеп күреп, бергә эшләгән коллегалары, дуҫтары менән аралашыуҙан айырым бер йәм табып, ҡыуанып ҡайтты ул был сәфәрҙән. Ҡала хакимиәтенең рәсми ҡабул итеүендә 77 йәшлек ағайыбыҙ башҡорт халыҡ йыры "Таштүрә"не һуҙып ебәреп, Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән йыйылған барса ҡунаҡтарҙы таң ҡалдырҙы. Ғөмүмән, беҙҙең сығыш иң эстәлекле һәм иң ҡыҙыҡлыһы булғандыр. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Өфө ҡала округы хакимиәте исеменән ҡотлауҙарыбыҙҙы еткереп, бүләктәребеҙҙе тапшырғандан һуң, яҡут дуҫтарыбыҙға ошо рәүешле йыр-моң күстәнәстәрен дә бүләк иттек. Йәш ҡурайсы, Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенты Илгиз Нәҙерғоловтоң дәртле бейеү көйҙәренә сыҙап ултыра алмай, урындағы башҡорттар бер-бер артлы бейергә төшә башлағас, барса халыҡ тәүҙә фотоаппараттарына үрелде, ә һуңынан сығыш яһаусыларҙы алҡыштарға күмде. Эйе, һәр халыҡтың үҙ милли йөҙө була! Туған телебеҙгә, халыҡ көйҙәренә, милли кейемдәребеҙгә, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙгә тоғролоҡ - тап ошо һыҙаттар халыҡты халыҡ итеп таныта, ихтирам тойғоһо уята шул.



### Дьөһөгөйҙәрен ҡайттым яратып!

Дөрөҫөн әйткәндә, мин Саха-Яҡут ерендә болан культын күрергә әҙерләнеп килгәйнем. Баҡһаң, боландан да ҡәҙерлерәк күргән йән эйәләре бар икән. Бөйөк Тәңренең оло бүләге тип иҫәпләй атты яҡуттар. Дьөһөгөй тип йөрөтәләр уны. Бөгөнгө көндә республикала 200 мең баш ат иҫәпләнә. Яҡут аттары оҙон яллы, ҡуйы йөнлө. Аттар беҙҙәге кеүек һарайға бикләнмәй, улар йыл әйләнәһенә яланда йөрөй. Һәм шунлыҡтан, яҡут аттары үҙҙәренең ялында һәм ҡуйы йөнөндә ҡояш энергияһын - ерҙәге йәшәү сығанағын туплап йөрөй, тип ҡабул ителә. Ат ялы уникаль материал иҫәпләнә. Нимә генә эшләмәйҙәр унан: башлыҡтар, кейемдәр, билбауҙар, сумкалар, балаҫтар, гобелен, панно, һәр төрлө биҙәүестәр... Ат ялы менән бөтәһе лә булаша алмай. Айырым оҫталыҡ һәм сыҙамлыҡ (был ҡул эше күп ваҡытты ала) талап иткән был һөнәр быуындан-быуынға изге ҡомартҡы кеүек тапшырыла килә. Ат ялынан үрелгән әйберҙәр яман көстәрҙән һаҡлай һәм дауалай, тип иҫәпләй яҡуттар. Ул шулай уҡ кире энергияны ла юҡҡа сығара, нервыларҙы тынысландыра, һыҙланыуҙы баҫа. Ат ялынан етештерелгән массажерҙарҙың 20 төрө бар. Улар һыуыҡ тейгәндә ярҙам итә. Шулай уҡ баш ауырыуҙарын, остеохондрозды дауалай.

Яҡуттарҙың деликатесы ла нельма, муксун, чир, омуль кеүек аҡ балыҡтар түгел, ә ҡолонҡай ите булып сыҡты. Яратҡан эсемлектәре, әлбиттә, ҡымыҙ!

**✓ Дьөһөгөй - яҡут халҡының символы. Ошо юлдарҙы яҙғанда, йөрәк майҙарын һыҙырып, үҙебеҙҙең Аҡбуҙат иҫкә төштө. Йүгәнләр батырын эҙләп, ҡайҙарҙа ғына сабып йөрөй икән азатлыҡ һөйгән илаһи малҡайыбыҙ?..**

# Илендә...

## йәнде иретте

Дьөһөгөй - илаһи арғымаҡ саха халҡының яҡлаусыһы, ҡурсалаусыһы иҫәпләнә. Шуға ла йәштәрҙең һәм балаларҙың бейеү элементтары ат сабышын һынландыра. Ғөмүмән, бейеү ритмдарында халыҡтың рухи үҫешкә ынтылыуын тойомламау мөмкин түгел: ниндәйҙер бер мөғжизәле энергетика, оптимизм, үҙ-үҙенә сикһеҙ ышаныс, алға ынтылыу күҙәтелә был бейеүҙәрҙә. Хатта урындағы шамандар ҙа баш сайҡау, яурын һелкетеү, арҡа буйын ҡалтыратыу, тыпырҙау кеүек аттарҙың пластикаһын ҡабатлап, экстазға инә икән.

Хәйер, ат культына табыныу яҡуттарҙың “Олонхо” эпосында ла асыҡ сағыла бит. Саха ҡыҙҙарын йәш бейә менән сағыштырыу уның матурлығына, йәшлегенә иң оло баһа булараҡ иҫәпләнә. Егеттәрҙе иһә айғырға тиңләү - уның көсөн, таһиллығын, юғары дәрәжәһен таныу тигән һүҙ.

Ысыах уҙғарылған майҙанда 99 һырғы ҡағылып, һәр береһенә берәр ат бәйләнеп ҡуйылғанын күреп, аптырағайным тәүҙә. Хәҙер аңланым: дьөһөгөй - яҡут халҡының символы. Ошо юлдарҙы яҙғанда, йөрәк майҙарын һыҙырып, үҙебеҙҙең Аҡбуҙат иҫкә төштө. Йүгәнләр батырын эҙләп, ҡайҙарҙа ғына сабып йөрөй икән азатлыҡ һөйгән илаһи малҡайыбыҙ?..

### "Нөрүөн нөргүй!"

Якутск аэропортына килеп төшөү менән ҙур хәрефтәр менән яҙылған "Нөрүөн нөргүй!" тигән оло плакат ҡаршы алды беҙҙе. Тәржемәһен аңламаһам да, нисектер, күңелгә ятышлы, ғәжәп йылы һүҙ кеүек тойолдо ул миңә. Хаталанмағанмын икән, беҙҙеңсә "Рәхим итегеҙ!" тигәнде аңлата, тинеләр ҡаршы алыусы дуҫтарыбыҙ.

Алда әйтеүемсә, һәр республиканың үҙ үҙенсәлеге була. Ҡайһы бер нәмәләрҙе күреп, фәһем алаһың, ҡайһынын күреп - ғибрәт тигәндәй. Якутск әллә ни ҙур ҡала түгел. Урамдар ҙа тар ғына. Ул миңә беҙҙең Сибай, Стәрлетамаҡ кеүек бәләкәй ҡалаларҙы хәтерләтте. Хәйер, юҡ! Үҙебеҙҙең Стәрлетамаҡҡа тиңләп буламы ни! Унда бит урам буйында бәләкәй генә сүп ятҡанын да күрмәҫһең! Ә бында... Хатта һәйкәлдәр эргәһендә лә селпәрәмә килгән шешә ватыҡтары тулып ята. "Йәштәр шулай төндәрен күңел аса", - тип аңлаттылар беҙгә. Юҡ, беҙҙә улай түгел, Аллаға шөкөр! Өфө урамдарында кискеһен хатта ҙур-ҙур байрамдар уҙғарылһа ла, таң атыуға йыйыштырылыу була.

Ә бына ҡаланан ситтә урынлашҡан зоопарктарын күреп, көнләштем бер аҙ. Хайуандар интегеш ситлектә ултырмай. Уларға бөтә шарттар булдырылған: ғәләмәт ҙур территория, иркен вольерҙар, ҡышлар өсөн йылытылған айырым биналар. Аҡ айыуҙар өсөн оло һыу бассейны.

Тағы "Мәңгелек боҙ батшалығы" музейы оҡшаны. Йәй уртаһында толоп, аяҡтарға быймалар кейеп, тау эсендә урынлашҡан ҡышҡы музейҙа йөрөү бик күңелле булды. Боҙ скульптураларының ниндәйе генә юҡ бында! Ошонда уҡ боҙ скульптуралары буйынса халыҡ-ара конкурс уҙғарғандар икән. Был сараға әллә нисә йыл ваҡыт үтһә лә, еңеүселәрҙең эштәре һаман күҙҙең яуын алып тора, исмаһам, берәй ере иреп, йә кителеп төшһәсе! Боҙ мәмерйәһе эсендә балалар өсөн боҙ тауҙарынан шыуып уйнау мөмкинлектәре лә бар. Иң ҡыҙығы, әлбиттә, туң килеш һаҡланған ысын мамонтты күреүебеҙ булғандыр. Саха-Яҡут ерендә бигерәк тә был гиганттарҙың оло һуҡҡы тештәре (бивень) күп табыла. Уныһына инде аптырамаған, беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙа ла табылғаны бар мамонт һөйәктәре, тик бында уларҙы тейешенсә эшкәртеп, төрлө сувенирҙар етештерәләр икән. Ә бөтөн килеш кенә табылған һуҡҡы тештәрҙе матур итеп шымартып, лаклағандан һуң, 800 мең - 1 млн һумға һатыуға сығаралар!

Тағы ла Ысыах байрамы үткәрелгән ерҙә мотлаҡ рәүештә төҙөлгән ағас конструкцияларҙың: оло сәхнә, декоратив ҡапҡалар, һырғылар, күп һанлы урасаларҙың (чум рәүешендәге ағас өйҙәр) ҡабаттан һүтеп алынмауы бик оҡшаны. Халыҡ бик изге урындарға экскурсияға килә, артабан да шул майҙанда байрамдар үткәрә.

Ҡатын-ҡыҙ булараҡ, әлбиттә, яҡут биҙәүестәренә битараф ҡала алманым. Юҡ, ат хаҡы торған яҡут бриллианттарына иҫем китмәне минең. Ә бына төрлө аҫыл таштар менән биҙәлеп, күҙҙең яуын алып ятҡан көмөш алҡалар, муйынсаҡтар, беләҙектәр арбаны ла ҡуйҙы бит! Үҙебеҙҙә милли колоритты сағылдырған биҙәүестәр бындағылай һәр сауҙа йортонда тулып ятмай шул!

Бер уйлаһаң, оло Рәсәйебеҙҙәге һәр халыҡ йөҙөк ҡашы кеүек бит ул! Уларҙың береһе генә юҡҡа сыҡһа ла, дөйөм орнаменттың бәҫе юғаласаҡ. Һәр халыҡ үҙ теле, үҙ йолалары, үҙенең милли йөҙө менән матур. Әйҙә, бер илдә беҙгә: "Шумбрачи, ялгат!" - тип, бер илдә: "Нөрүөн нөргүй!" -тип өҙөлөп өндәшһендәр. Беҙҙе лә Хаҡ Тәғәлә ғүмер буйы ҡулланылышта булған туған телебеҙҙән айыра күрмәһен! Килгән-киткән ҡунаҡтарҙы алыҫ киләсәктә лә ауыҙ тултырып, саф башҡортса: "Рәхим итегеҙ! Хуш килдегеҙ!" - тип тәбрикләргә яҙһын!

### "Беҙ бит башҡорттар!"

Саха-Яҡут еренә аяҡ баҫыу менән беҙҙе ихлас ҡаршы алып, һәр ерҙә оҙатып йөрөгән ике ханым тураһында бәйән итмәһәм, сәфәрнамәм тулы булмаҫ кеүек. Бик булдыҡлы, уңған, сая ҡыҙҙар улар: Римма Абдулла ҡыҙы Хущамова (Әлибәкова) һәм Резедә Рәүеф ҡыҙы Дацкая (Низаметдинова). Республикабыҙҙан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙҙе туплап торған ир йөрәкле ҡыҙҙар. Римма Хущамова Якутск ҡалаһы башҡорттары ойошмаһы рәйесе булһа, Резедә Дацкая Алдан башҡорттарының етәксеһе. Ундай рухлы ҡыҙҙар үҙебеҙҙә лә артыҡ булмаҫ ине лә, ни хәл итәһең, ейер ризыҡтары ситкә сәселгән булғандыр инде. Баймаҡ һылыуы Римма Хущамова Якутскийға тормош иптәше менән 1990 йылда күсеп килә. 6 йылдан һуң тәүҙә агроном, һуңынан участка милиционеры булып эшләгән һөйкөлө иренең фажиғәле үлемен сит-ят ерҙә нисек күтәрә алғандыр, бер үҙе генә белә! Ярай ҙа, эргәһендә бауыр баҫырға берҙәнбер бөртөк ҡыҙҙары Гүзәле була. Уны аҡыллы, инсафлы итеп үҫтереү өсөн бөтә тырышлығын һала сабыр ҡатын. Үҙебеҙҙең мөхиттә ҡалһын өсөн ҡыҙын Өфө дәүләт нефть техник университетына уҡырға индерә. Балаһы ҡулына диплом алғансы мохтажлыҡ кисермәһен, уҡып, кеше булһын, тип, ал-ял белмәй эшләй ҙә эшләй. Якутскийҙа етәксе урындарҙа эшләгән Римма Абдулла ҡыҙының абруйы бик ҙур. Ҡала чиновниктары ла, башҡа милли ойошмаларҙың етәкселәре лә уны әллә ҡайҙан күреп, ихлас сәләмләй. "Кире Башҡортостаныбыҙға алып ҡайтып китә күрмәгеҙ, Риммаһыҙ беҙ ни эшләй алабыҙ?!", - тип шаяртып алды Саха-Яҡут Республикаһының баш мөфтөйө Муса хәҙрәт. Уның һүҙҙәрендә дөрөҫлөк бар. Бөтә дини байрамдарҙы ла бергәләп ойоштора улар. Мосолман ҡәрҙәштәрен һуңғы юлға оҙатҡанда ла бөтә тейешле йолаларҙы үтәү улар өҫтөндә. Иманлы ҡатын Якутск ҡалаһындағы мосолман зыяратын тәртипкә килтереүҙә лә үҙ бурысы һанай.

Резедә Дацкаяның Алдан ҡалаһында тештәрҙе протезлау буйынса үҙ шәхси клиникаһы бар. Үҙһүҙле, тырыш, кәрәк икән уҫаллыҡ та күрһәтә белгән Резедә Рәүеф ҡыҙы ауыр йылдарҙа ла бирешмәй, клиникаһын һаҡлап алып ҡала. "Ә бит заманында биш йәшлек кенә улымды күкрәгемә ҡыҫып килеп төпләнгәйнем был яҡтарға, - тип хәтерләй ул. - Ошонда мин үҙ ишемде, үҙ эшемде таптым. Улым эргәһенә ҡыҙым да тыуҙы. Әле өләсәй булыуыма ҡыуанам. Ейәнемдә башҡорт рухын тәрбиәләйем. "Мин - Салауат Юлаев!" тип уйнай ул балалар баҡсаһында ла..."

Ике ханым үҙҙәре йәшәгән ҡалаларҙа һабантуйҙар уҙғара. Төрлө сараларҙа ҡатнашып, башҡорт мәҙәниәтен пропагандалай. Ауырлыҡтарҙа зарланмай улар. Йәмәғәтселек эшен егелеп йөрөп тарталар. Уларҙың талымһыҙлығына, тырышлығына, ихласлығына беҙ ҙә һоҡландыҡ. Урындағы халыҡ та йылы мөнәсәбәтен белдерһә: "Беҙ бит башҡорттар!" - тип кенә ҡуя ҡыҙҙар.

Ә проблемалары етерлек инде. Төрлө саралар үткәргәндә күргәҙмә өсөн республикабыҙ символикаһы, милли кейемдәге ҡурсаҡтар, сувенирҙар, китаптар кәрәк икән. "Их, башҡорт тирмәһе һатып алырға ине!" - тип тә хыяллана ханымдар. Башҡорт телендә сыҡҡан матбуғат баҫмаларын да һағыналар. Республика кимәлендә үткәрелгән байрам сараларының планы ла алданыраҡ ебәрелһә, һәйбәт булыр ине, тип һөйләшеп алдылар. "Быйыл минең тыуған яғым Салауат районында Салауат йыйыны уҙғарылыуын алданыраҡ белһәм, отпускамды тап шул мәлдә алған булыр инем, ныҡ үкенесле булды ҡайта алмауым", - тип көйәләнде Резедә.

Ҡыҙҙар икеһе лә үҙҙәре килеп бөтмөрҙәр. Милли кейемгә тиклем хәстәрләгәндәр. Резедә ысыахҡа үҙе тегеп кейгән күлдәк менән еләндә килгәйне: "Ҡашмау менән һаҡалымды Баймаҡта йәшәгән һеңлем ебәрҙе!" - ти ул ҡыуанып.

- Яҡут-Саха Республикаһында бөгөн 6 меңгә яҡын башҡорт йәшәй. Уларҙың төрлөһө төрлө сәбәп менән килеп ереккән бында. "Үҙебеҙҙең йыр-моңдарҙы, тыуған яғыбыҙҙы бик һағынабыҙ! - тиҙәр. - Тик ни эшләптер Башҡортостан артистары, яҙыусылары килеп етмәй Себер яҡтарына, Татарстандан йыш ҡына килеп торалар тороуға...

Ысынлап та, битараф булмайыҡ әле алыҫ яҡтарҙағы милләттәштәребеҙ яҙмышына! Ситтә йәшәһәләр ҙә халыҡ иҫәбен тулыландырып тора бит яҡташтарыбыҙ. Ризыҡтары тартып, тыуған яҡтарыбыҙға әйләнеп ҡайтһалар, тағы ла шат булырбыҙ. Ә әлегә имен-аман торһон улар, мәңгелек боҙ илендә күңел ихласлығы менән йәнебеҙҙе иреткән аҫыл башҡорт балалары!

*Бер уйлаһаң, оло Рәсәйебеҙҙәге һәр халыҡ йөҙөк ҡашы кеүек бит ул! Уларҙың береһе генә юҡҡа сыҡһа ла, дөйөм орнаменттың бәҫе юғаласаҡ. Һәр халыҡ үҙ теле, үҙ йолалары, үҙенең милли йөҙө менән матур. Әйҙә, бер илдә беҙгә: "Шумбрачи, ялгат!" - тип, бер илдә: "Нөрүөн нөргүй!" -тип өҙөлөп өндәшһендәр. Беҙҙе лә Хаҡ Тәғәлә ғүмер буйы ҡулланылышта булған туған телебеҙҙән айыра күрмәһен! Килгән-киткән ҡунаҡтарҙы алыҫ киләсәктә лә ауыҙ тултырып, саф башҡортса: "Рәхим итегеҙ! Хуш килдегеҙ!" - тип тәбрикләргә яҙһын!*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тарихҡа күҙ һалайыҡ: 1913 йылда Якутскийҙа мәсет төҙөүҙе һорап яҙылған хатта, мосолмандарҙың күплегенә ишаралап, бында 1 678 башҡорт, 66 ҡырғыҙ, 3 татар йәшәй, тип дәлилдәр килтерелгән. Әммә 1924 йылда халыҡты иҫәпкә алыу ваҡытында ошо халыҡтарҙың барыһын да татар тип яҙып сыҡҡандар. Шуға ла, шәжәрә ептәрен барлай башламағас, үҙҙәрен татар икән тип һанап йөрөгәндәрҙең тамырҙары Башҡортостанға килеп тоташҡанына һис ғәжәпләнерлек түгел. Уғры мөһөрө менән Себергә оҙатылһа ла, һөргөнгә ебәрелгән ата-бабаларыбыҙҙың күбеһе алдынғы ҡарашлы, уҡымышлы, диндар кешеләр булған бит. Азатлыҡ өсөн һуғышҡан, илен, ерен, динен яҡлап сыҡҡан яугир уҙамандарыбыҙҙың вариҫтары йәшәй унда. Ҡыҫҡаһы, тарихсыларыбыҙ өсөн эҙләнәһе материалдар бик күп был тарафтарҙа. Һөргөнгә ебәрелгән ата-бабаларыбыҙ әйләнеп ҡайтыу юлдарын таба алмаған, Себер киңлектәрен "рәшәткәһеҙ төрмә" тип атаған. Саха-Якутстандың башҡорттар күпләп йәшәгән Олекма, Амга кеүек райондары, Бочанай, Новоалександровка тарафтары, моғайын да, үҙҙәрендә әллә күпме сер һаҡлай торғандыр. Беҙҙең һәлкәүлегебеҙ арҡаһында ошо юҫыҡтағы халҡыбыҙ тарихы ла мәңгелек боҙ ҡатлауы аҫтында тороп ҡалмаһын ине!**

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

✓ ***Сырҡ-сырҡ иткән тауыштарға әйләнеп ҡараны ла, Сулпанды ике яҡтан етәкләп, яй ғына атлап һөйләшеп килгән Ләйсән менән Тәлгәтте күреп, бер аҙға телһеҙ ҡалды.***



Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# БӘПӘЙ ЕҪЕ

Хикәйә

Тынысландымы-юҡмы, һәр хәлдә, ошо эштәр башланғандан алып ныҡ үҙгәрҙе ире. Элек ял көндәре генә күрешеп, уларында ла нимәләр менән мәшғүл булһалар, хәҙер ике күҙе өйҙә. Киске алтыла "тыҡ" итеп ҡайтып инеп тороуы етмәгән, төшкө ашҡа ла бында саба башланы. Үҙе бер буш ҡул булмай. Ике һыуытҡыс та лыҡа тулы икәнлекте белә тороп, һаман да пакет-пакет аҙыҡ-түлек, йәшелсә-емеш ташый. Һәм, әлбиттә, бәләкәс Сулпан өсөн мотлаҡ берәй нәмәһе була. Был "нәмә" башта гонаһһыҙ тундырманан ғына башланһа, һуңғы көндәрҙә оло йомшаҡ уйынсыҡтарға, хатта ҡупшы ҡулдәктәргә барып етте. Асияға тәүҙәрәк иренең был ҡылығы үҙенә лә ирмәк булһа, тора-бара йәненә тейә башланы. Көнсөллөк бесәйе күңел итен үткер тырнағы менән сыйып ебәрҙе. Тик әлегә баш ҡайғыһы түгел. Әлегә башҡа мәшәҡәт беренсе планда. Әгәр ҙә процедураны ҡабатларға тура килһә...

Тура килмәне. Бер көн кис һуңлап ҡына кеҫә телефонына шылтыраттылар. Алып ҡараһа - Ләйсән. "Бәй! Ҡайҙа һуң ул был ваҡытта?"

- Ләйсән, ҡайҙан шылтыратаһың? Һин ҡайҙа?

- Өйҙә мин, өйҙә, Асия апай, шауламағыҙ, - йәш ҡатын шыбышлауға күсте. - Һеҙ ятманығыҙмы әле?

- Ятып йөрөйөм. Нимә булды, Ләйсән?

- Беҙҙең бүлмәгә инеп сыҡмаҫһығыҙмы икән, тик Тәлгәт ағай ишетмәһен йәме.

- Хәҙер.

- Ләйсәнме ул? Ни булған? - Тәлгәт йыуынырға инеп барған еренән кире боролоп, кейенә башлағайны ла, Асия ҡәтғи тыйып сығып китте:

- Тороп тор әле, бисәләр эшенә тығылып!

Барып инһә, Ләйсән диңгеҙ шикелле киң түшәгенең уртаһында аяҡ салып көтөп ултыра. Ҡыҙсығы кесөктәй генә булып йомарланып мышнай. Асия бер йоҡлап ятҡан сабыйға, бер ҡатынға күҙ һалды:

- Нимә булды, Ләйсән? Ҡурҡыттың...

- Ғәфү итегеҙ, Асия апай, һеҙҙең ваҡытығыҙ булғанды көтөп йөрөнөм дә... Һуң ҡайтаһығыҙ йә бөтөнләй өйҙә булмайһығыҙ кистәрен. Шуға шылтыратайым тинем, барып туҡылдатып торғансы.

- Йә... - Асия ике күҙен тултырып, Ләйсәндең ауыҙына төбәлде, әйтерһең дә унан алтын ҡошсоҡ осоп сыға.

- Йә тип ни... ну... шул инде.

- Нимә "шул инде"?

Ләйсән апаһының аңышлылығына аптыраны. Нимәһен төшөнә алмай һуң ул?

- Ауырлымын мин...

Асияға көтөп ала алмай йөрөгәнә артыҡ көтөлмәгәнсә булды. Ул караут эргәһендәге тумбаға ултыра төштө. Унан ҡапыл ынтылып балаға тип ултыртылған һөттө күтәреп эсте лә, шунан ғына теленә килә алды:

- Т-точнымы?

- Точны. Үткән аҙнала уҡ тест алып ҡарағайным - күрһәтә. Уже билдәләре лә һиҙелә, токсикоз башланмаҡсы.

- Тә-әк... Тә-әк. Былай булғас - булды! Булды! - Тороп, устарын ыуалап, бүлмә буйлап үтте, сыҙамай, сәпәкәйләп ебәрҙе. - Булдырҙыҡ бит былай булғас, Ләйсән! Тукта, Тәлгәт ағайыңа һөйөнсөләйем әле!

Артынан ишек ябылып өлгөрмәне, кире килеп инде һәм:

- Маладис, Ләйсән! "Бишле" һиңә! Иртәгә врачҡа барырбыҙ, ҡалған инструкцияларҙы алырбыҙ. Инде аша, ял ит, йоҡла - һинең эшең хәҙер шул, - тип сығып та китте.

* * *

Ошо көндән, дөрөҫөрәге ошо кистән һуң, был өйҙә бер нәмә лә элекке кеүек була алмай ине инде. Һәр хәлдә, Асияға шулай тойолдо. Хәҙер уларҙың йәшәү рәүеше, уй-хыялы, маҡсаттары, хатта тын алышы ла икенсе. Хәҙер уларҙы бөтәһен бергә туплаған, нығытып бәйләп ҡуйған сәбәп - буласаҡ бәпес бар. Әлбиттә, әлегә "бәпес" тигәндең бары тик атамаһын ғына ҡабул итә, аңлай кеүек ул, ә асылын... Уныһы инде икенсе мәсьәлә.

Ләйсәнде баштан-аяҡ иғтибар үҙәгенә әйләндерҙеләр. Бигерәк тә Асия апаһы. Нимә ашай, нимә кейә, нисәлә йоҡларға ята ла, ниндәй көйҙәр тыңлай... Хәҙер быларҙың барыһы ла ныҡлы күҙ-ҡолаҡ астында. Әле ҡасан ғына уның нимә ашау түгел, ҡайҙа барып баш терәре менән дә ҡыҙыҡһынған әҙәм юҡ ине. Бөгөн килеп, түшәге ҡаты йәки итеге уңайһыҙ була күрмәһен, имеш.

Йөклөлөк тә үҙенекен итте. Йәш ҡатын ваҡыты-ваҡыты менән тиккә юҡтан көйһөҙләнде, әле илағыһы килде, әле сәбәпһеҙгә генә көйөнөп китте. Иртәнге уҡшыуҙар, хәлһеҙлек, еҫтәрҙе күтәрә алмау, аҙыҡ һайлау уның былай ҙа ҡаҡса йөҙөн аҡ ҡағыҙ төҫөнә индерҙе. Етмәһә, әсәһенең башын икенсе нәмә биләгәнде һиҙенгән ҡыҙсығы ла ризаһыҙлығын һиҙҙереп мыжыҡланды. Һуҙылып төшөп ятҡан әсәһен йә тышҡа сығайыҡ, йә уйнайыҡ, тип тартҡылап торғоҙҙо, үсегеп, илап, сығырынан сығарҙы.

Был хәлдәр, бигерәк тә баланың был йортта бар икәнлеген белдереп тауышын сығарыуы Асияға оҡшаманы. Бигерәк тә шул ҡыҙҙы тынысландырам, тип иренең йүгермәләп йөрөүе оҡшамай ине уға. Нисек инде, уның өйөндә бер бармаҡ башындай бала үҙ хоҡуҡтарын булдырып ултыра ала! Был мәсьәләне йәһәт кенә хәл итә һалырға кәрәк ине. Һәм хәл итте лә Асия. Тиҙ арала шәхси балалар баҡсаларының берәүһе менән бәйләнешкә инеп килеште лә, Ләйсәндең ауыҙын да астырмаҫтан, Сулпанды елтерәтеп алып барып урынлаштырып та ҡуйҙы. Өйҙән "уйнарға" тип кенә сығып киткән сабый, ят урынға барып ингәс, ниҙер һиҙенеп, инәйенә һырынғайны ла, тегеһе сат йәбешкән кескәй ҡулдарҙан итәген һыпыра тартып алғас, күҙҙәрен селт-селт йомғолап, иларға ла ҡурҡып ҡатып ҡалды. Шуның менән был еңмештең яҙмышы хәл ителде. Хәҙер өйҙә тыныслыҡ урынлашты һымаҡ. Ләйсәндән башҡалар өсөн инде. Уның иһә, киреһенсә, йәненән тыныслыҡ китте. Сулпанының күҙҙәрендә нур һүрелгәнен, һулып, бошоноп киткәнен күрмәйме ни ул... Быға тиклем көн-төн күҙ алдында ғына булған сабыйының да аңлайышһыҙ айырылышыуҙан, әсәһен һағынып зарығыуҙан, сит балалар, ят апайҙар менән аралаша алмай аҙапланыуҙан шаңҡып ҡалғанын аңламаймы ни... Етмәһә, Асия апаһы: "Һинең шылтыратыуыңдан ҡоро зыян ғына булыр, бушҡа борсома баланы ла, тәрбиәселәрҙе лә", - тип, баҡсаның телефон номерын да бирмәне, йәнәһе, кәрәк булһа, уға сығасаҡтар. Үҙенә шылтыратһа, "Уға унда ни булһын, ашай ҙа уйнай, һин лучше үҙеңде ҡара", ти ҙә ҡуя. Ултыра бына сабыйының хәлен дә белә алмайынса. Тик бер ни ҙә эшләй алмай. Хатта, ана бит, кескәй Сулпан да Асия инәйгә ҡаршы тороп булмаҫты төшөнә - күнә.

Тик әсә күңеле һиҙмәй буламы ни инде. Бушҡа булмай сыҡты Ләйсәндең йөрәге һыҙлауы. Бер көндө өй телефонына шылтыраттылар, ғәҙәттә, ул телефондың тереме-юҡмы икәнлеге лә беленмәй ине, күрәһең, эшләй. Алырғамы-юҡмы тип икеләнһә лә, үтә лә ярһып ҡат-ҡат зыңлағас, трубканы күтәрҙе.

- Алло! Алло! Лесная, 13-мө? - теге остағы ҡатын-ҡыҙ тауышы сабырһыҙланып һораны.

- Эйе.

- Был балалар баҡсаһынан. Һеҙ ҡалдырған номер яуап бирмәй, адрес буйынса ошо телефонды саҡ таптыҡ.

- Ә нимә булды? - Ләйсән һағайҙы.

- Балағыҙ ауырыны, скорый менән дауаханаға алып киттеләр...

- Нисек?..

- Беҙ бит һеҙгә әйтә килдек, бала аралаша алмай, йүнләп ашамай, һөйләшмәй, тип. Бөгөн бына йөрөнә-йөрөнә лә ҡоланы ла ҡуйҙы. Бында врач юҡ, медсестра ғына...

Ләйсәндең артабан тыңлап торор хәле ҡалманы, ул сәсәй яҙып трубкаға ҡысҡырҙы:

- Ниндәй дауаханала? Ниндәй?

Яуапты ишеткәс тә трубканы шапылдатып һалды ла, шунда уҡ халат кеҫәһендәгеһе телефондан Асияның номерына баҫты. Тик унан моңһоҙ тауыш менән "Абонент не доступен" тинеләр. Нишләргә? Такси! Ләйсән өҫкә, бүлмәһенә йүгерҙе. Асия апаһының ҡәтғи тыйыуҙарын онотоп, ике баҫҡысты бер итеп үргә һикерҙе. Халатының аҫҡы төймәләре атылып осто хатта. Караут эргәһендәге тумба тартмаһын аҡтарып сығарып, ҡағыҙ битенә яҙып ҡуйылған һандар теҙмәһен телефонында ҡалтыранған бармаҡтары менән йыйҙы ла, теге яҡтан "Әү, Ләйсән..." тигәнде ишеткәс, ебеп төштө: "Тәлгәт ағай..."

* * *

Кисен Тәлгәт менән Асия араһында етди генә тауыш ҡупты.

- Ниңә һин бисәләр эшенә тығылаһың? Кем һораған һинән! Минең тырышлығымды юҡҡа сығарырға шәпһең инде!

Күп осраҡта өндәшмәй ҡалырға күнеккән Тәлгәттең дә был юлы ниңәлер яуапһыҙ ҡалғыһы килмәне:

- Һинең хеҙмәтең кеше балаһын интектереүме? Ҡыҙыҡай зарығыуҙан иҫен юйған, һарғайыуҙан, аңлайһыңмы шуны?

- Бармаҡ башындай баланың капризына юл ҡуяйыҡмы? Бәлки, ул иртәгә әллә нимәләр талап итер!

- Балаға бары әсәһе кәрәк - шул ғына!

- Бөгөнгө көндә садик табыу еңелме? Ниңә минән бер монстр яһайһығыҙ? Ул бит өйҙә көнө буйы әсәһенә тағылып йөрөп, уны йонсота! Һиңә һау бала кәрәкмәйме ни?.. - Асияның артҡа сигенер иҫәбе юҡ.

- Кемдең икенсе бала табам тип беренсеһен сығарып ташлағанын күргәнең бар? Үҙебеҙҙе нисек үҫтерҙеләр һуң, миңә өс йәштә ҡустым әсәйҙәң ҡулында, өсөнсөбөҙ ҡорһаҡта булған. Кем әйтмешләй, үҙ йөгөң ауыр булмай ул, - Тәлгәт, шуның менән һөйләшеү тамам икәнлекте белдереп, бүлмәнән сығып уҡ китте.

"Тегеләр янына инде, шул еңмеште әпәүләргә...", - тип өҙгөләнде Асия.

Ошо хәлдән һуң Асия Ләйсәнде хәстәрләүҙең күп өлөшөн иренең елкәһенә һалырға тырышты. Тәлгәттең ҡайһы ваҡыт "Һуң, эштәмен бит...", тиеберәк һөйләнеүенә шунда уҡ: "Минең тырышлыҡты һанламайһығыҙ бит...", - тип кенә ҡуйҙы. Шунлыҡтан, хәҙер ир кешегә йәш ҡатынды табипҡа, дауалау үҙәктәренә һәм ҡатыны уйлап тапҡан тағы әллә нисә төр шифалы гимнастика кеүек юҡбарға алып барып, алып ҡайтып ҡуйырға тура килә. Уларҙан тыш, йыш ҡына бергәләп театр-концерттарға, циркка, ял парктарына йөрөйҙәр. Әлбиттә, бындай сәйәхәттәргә Асия ҡушылмай, уның мөһимерәк, файҙалыраҡ эштәре етерлек.

Бер ял көндө шулай төшкә ҡарай ғына йоҡонан торҙо ла, тегеләрҙең юҡлығынан файҙаланып, иркенләп ултырып кофе эсеп алғас, аҙна башында уҡ яҙылып ҡуйған солярийға барып килмәксе булып, машинаһын йылыта ине. Сырҡ-сырҡ иткән тауыштарға әйләнеп ҡараны ла, Сулпанды ике яҡтан етәкләп, яй ғына атлап һөйләшеп килгән Ләйсән менән Тәлгәтте күреп, бер аҙға телһеҙ ҡалды. Юҡ, уларҙы беренсе тапҡыр бергә күреүе лә түгел. Бары тик ошо бөтөнлөк, идиллия күренешенән ҡаушаны ул. Оҙон, мөһабәт кәүҙәле, йөҙөнә олпатлыҡ сыҡһа ла әле сәстәренә сал инмәгән күркәм ир янында йәш, һөйкөмлө ҡатын, етмәһә, ауыры ла беленеп, үҙен тағы ла серлерәк, яғымлыраҡ итеп торғандай. Урталарында кескәй бала турғайҙай сорлап, көлә-шаяра һикрәңләп килә. Ире - Тәлғәте, әйтерһең, ғүмер буйы йәшәгән ҡатыны менән килә тиерһең, ауыҙын йыйып ала алмаҫтан, әллә нимә һөйләй, йөҙөндә сағылған нур, күҙҙәрендәге осҡондар әллә ҡайҙан балҡып тора.

Ә бит уларҙың үҙҙәренең ошолай иртәләп, яйлап, бергәләп йөрөгәндәре лә юҡ. Етмәһә, бала менән... Асияның йәнен әлеге таныш көнсө бесәйе бер тырнағы менән генә сыйып ебәрҙе лә, йөрәгенә асыу ҡатыш ҡан һауҙы...

Килеүселәр ҙә машина эсендәге Асияны аңғарҙылар. Ләйсән ҡыҙын уртанан үҙ яғына күсереп етәкләне лә, башын баҫып, шыбырлап ҡына тигәндәй "Һаумыһығыҙ!" тип үтеп китте. Тәлғәт иһә ирәйеп, әҫәрләнеп тора бирҙе. Асия ла былай ғына ҡуҙғалып китә алмай ине.

- Нимә? Ғаиләңде прогуливать итәһеңме таңдан? - машина быялаһын төшөрөп, шулай тип мыҫҡылланы ул ирен.

Тик тегеһенең бер ҙә иҫе китерҙән түгел, илһамланып, бөрөгә бүрткән ағас суҡтарын ҡарашы менән иркәләп баҫып тора бирҙе:

- Беренсенән, инде төш етеп килә, икенсенән, мынауындай матур ялда ысынлап та ғаилә менән йөрөргә кәрәк, ә красота салондарына сабырға түгел. - Унан кинәт ҡарашын ҡатынына төшөрҙө. - Төш тигәндән, төшкө аш ашатҡан кеше булырмы икән бөгөн?

Асияға етә ҡалды:

- Ана, "ғаиләң" ашатһын! - тип ыҫылданы ла ҡуҙғалып китте.

**(Дауамы бар).**

*ИЖАДХАНА*

# ҮҘЕМ БУЛЫП КИЛӘ ҠАЛАҺЫМ...



**Үҙен белә-белгәндән алып бейеүсе булырға хыялланa Бөрйән районының Иҫке Монасип ауылында донъяға килгән, саңлы урамында балалыҡ эҙҙәрен ҡалдырған, эргәләренән аҡҡан йәмле Ағиҙел йылғаһына, уның мәғрүр аҡ ҡаяларына ҡарап таң ҡалған һәм ошонан ҙур тормошҡа юл алған Сөмбөл.**

- Ун ғына йәшемдә Белоретта үткән "Башҡортостан йондоҙсоҡтары" конкурсында ҡатнаштым һәм тәүге ҙур еңеүемә өлгәштем, - тип иҫкә ала бөгөн Сөмбөл Моратова. - Ошо уңышым минә ҡанат ҡуйҙы ла инде: яңы йырҙарҙы тағы ла дәртләнеберәк, сәмләнеберәк өйрәнә башланым. Тырышлығым бушҡа китмәне - 1997 йылда башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыусыларҙың Сибай ҡалаһында үткәрелгән "Ирәндек моңдары" икенсе төбәк-ара бәйгеһендә балалар араһында беренселекте яуланым. Мәртәбәле бәйгелә уңыш ҡаҙаныуым минең балалыҡ хыялдарымды киҫкен генә бороп ебәрҙе. Быға ҡәҙәр бейеүсе булыу теләге менән яныуым сәнғәттең икенсе юҫығына табан йүнәлеш алды....

Йыр-моң бәйгеләрендә юғары баһалар алған ҡыҙ, ауылы мәктәбендә туғыҙынсы кластs тамамлағас, документтарын Өфө сәнғәт училищеһының вокал бүлегенә илтеп тапшыра. Бында ул билдәле педагог Әлфиә Мәсәлимова класында шөғөлләнә, унан бик күп файҙалы кәңәштәр, төплө белем ала. Нәҡ остазының тәҡдиме һәм кәңәше буйынса буласаҡ йырсы училищела уҡыған йылдарында уҡ республикабыҙҙа үткәрелгән төрлө конкурстарҙа әүҙем ҡатнаша һәм һәр ваҡыт юғары башҡарыу оҫталығы, халыҡ йырҙарын тәрәндән тойомлау, аңлау һәләтен күрһәтә. Әлбиттә, талапсан тамашасылар ҙа Сөмбөлдөң тәбиғи һәләтен, йыр-моңға маһирлығын үҙ күрә һәм уның һәр сығышын дәррәү алҡыштарға күмә. 2000 йылда "Урал моңо"нда - икенсе, 2002 йылда "Оҙон көй"ҙә - өсөнсө һәм шул уҡ йылда "Ирәндек моңдары"нда икенсе урындарҙы яулауын йырсы тәү сиратта Әлфиә Кәрим ҡыҙы биргән һабаҡтар менән бәйләй һәм икөүһенең уртаҡ уңышы тип һанай.

Сәнғәт училищеһын уңышлы тамамлаған, хәҙер инде башҡорт йырҙарын һөйөүселәр араһында ярайһы ғына танылыу алған ҡыҙ хеҙмәт юлын Нефтекама филармонияһында башлап ебәрә. Тик күңеле тыуып үҫкән Бөрйәненә яҡын булған Сибай ҡалаһына тартыла һәм бер йылдан бындағы филармонияға ҡайтып, яҡташтарын моңло йырҙары менән һөйөндөрә башлай.

Талантлы йәш йырсы тамашасылар алдында йырлауҙан тыш, үҙен төрлө йыр-моң бәйгеләрендә һынап ҡарауын дауам итә. 2006 йылда үткәрелгән "Ирәндек моңдары" төбәк-ара конкурсы Сөмбөлгә ҙур еңеү килтерә: ул профессионал йырсылар араһында иң юғары дәрәжәгә - мәртәбәле бәйгенең төп призына лайыҡ була. Башҡортостан Республикаһы Президенты уға еңел автомобиль асҡысын үҙ ҡулдары менән тапшыра!

...Әсәһе - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы, РФ-ның мәғариф милли өҫтөнлөклө проекты гранты лауреаты Фәнүзә Фәсхетдин ҡыҙы Баймырҙинаның халыҡ йырҙарын үҙенсәлекле моң менән яратып йырлауын тыңлап үҫә Сөмбөл. Кем белә, бәлки, нәҡ Фәнүзә апай һалғандыр ҙа кескәй ҡыҙының бөрөләнеп килгән йөрәгенә милли көй-моңдарыбыҙға һөйөүҙе. Һәр хәлдә, уҡытыусылар ғаиләһендә матур тәрбиә алып, аныҡ маҡсат һәм донъяға аңлы ҡараш менән үҫкән ҡыҙҙың бөгөн сәхнә күркe булыуы бушаҡлыҡтан ғына түгелдер. Заманында мәктәп директоры булып эшләгән, "Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы", "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре" исемдәренә лайыҡ атаһы Ривал Рәхмәт улы ла ҡыҙының уңыштарына үҙ өлөшөн индермәй ҡалмағандыр.

Бөгөн Сөмбөл тормошта аныҡ маҡсаттар менән йәшәгән, заман менән бер аҙымда алға атлаған хәстәрлекле хужабикә лә. Тормош иптәше Ғәйсәр менән бына һигеҙ йыл инде ҡулға-ҡул тотошоп бик матур йәшәйҙәр.

- Аллаға шөкөр, эш көнөнән һуң арып ҡайтып инергә йылы, күңелебеҙгә хуш килгән өйөбөҙ, иртән тороп, ашҡынып барыр эш урындарыбыҙ бар, - тип ҡыуанып һөйләй әңгәмәсем. - Атай, әсәй, тип һағынып ҡайтыр тыуған йорттарыбыҙ имен, яҡын туғандарыбыҙ иҫән-һауҙар. Мин үҙемде икеләтә бәхетлемен, тип ғорурлыҡ менән әйтә алам: мине аңлаусы, һәр һулышымды тойоусы, кәрәк икән - тәнҡитләүсе, йөрәк яраларыма дауа булыр яратҡан тормош иптәшем янымда. Иремә, унан да бигерәк уны үҫтергән ҡайным менән ҡәйнәмә ҙур рәхмәтлемен мин. Иҫән генә була күрһендәр, тим гел...

Популяр йырсы билдәле сәнғәт эшмәкәрҙәренең кемеһенәлер эйәреп, уларҙы ҡабатларға тырышмай. Арҙаҡлы сәхнә йондоҙҙары Флүрә Килдейәрова, Абдулла Солтанов, Ғәлиә Солтанова, Нәжиә Аллаяроваларҙың талантына ғашиҡ булып үҫкән ҡыҙ ижад өлкәһендә үҙ юлын, үҙ һуҡмағын һала. Уның өсөн кемдәлер ҡабатлау, кемгәлер оҡшарға тырышыу, әҙер, тапалған юлдан барыу ситен күренеш. Маҡсаты - киләсәккә, тамашасылар күңеленә үҙ һуҡмағын ярыу, тик үҙенсә генә булып ҡалыу! Булмышы менән тыныс холоҡло булған, һәр эште лә урын-еренә еткереп эшләргә яратҡан йырсы республикабыҙ тамашасыларына хис-тойғоларға бай, күңелдәргә үтеп инерлек йырҙарҙан торған үҙ концерт программаһын әҙерләү, йырҙарынан диск сығарыу өҫтөндә ныҡышмалы һәм ентекле эшләй.

- Насип булһа, ҙур сәхнәләргә лә сығырмын әле, тип өмөт итәм, - хушлашыр алдынан Сөмбөл эске кисерештәре, уй-хыялдары менән дә уртаҡлаша. - Иң мөһиме, һайлаған һөнәрем күңелемә яҡын һәм мин тамашасыларымды шул тиклем ныҡ яратам! Ни сәбәптәндер, уларҙы мин кескәй балалар кеүек күрәм. Уларҙы бер нисек тә алдап булмай - сәхнәлә һин нисек барһың, шулай ҡабул итәләр... Сәхнә - ул минең тормошом, һулар һулышым, йәшәү рәүешем! Һәр тамашасының үҙ йырсыһы, үҙ сәхнә оҫтаһы булған кеүек, минең дә үҙ тамашасыларым, йырҙарымды иш иткән үҙ тыңлаусыларым бар һәм мин шуның менән бәхетлемендә...

**Мотал РӘМОВ,**
**РФ һәм БР журналистар союзы ағзаһы.**

*БАЛАҢА УҠЫ!*

# ЙОМАРТЛЫҠ

Борон-борон заманда Хәтип исемле бер бай йәшәгән, ти. Бай булһа ла йомарт булған, ти ул. Яландарҙы иңләп көтөүҙәре йөрөгән. Байлығын башҡалар менән бүлешеүҙән оло кинәнес алған Хәтиптең Дөмәй исемле аты булған, ти. Тирә-яҡта был атҡа тиңдәр булмаған. Дөмәйҙең сабыуын көслө ел йә уласын ососш менән сағыштырғандар. Хәтип үҙенең атын ныҡ яратҡан һәм ҡәҙерләгән, уны бер н0мәгә лә алмаштырырға ризалыҡ бирмәгән.

Хәтиптең йомартлығы һәм уның тоғро аты тураһындағы хәбәр батшаға барып еткән. Ул үҙенең төп вәзирен саҡырған да:

- Хәтиптең йомартлығын һынап ҡарағым килә әле. Минең өсөн һора шул данлы атын. Бирерме икән? - тигән.

Икенсе көнөнә батша кешеләре юлға сыҡҡан. Төнөн ямғыр аҫтына ҡалып, улар Хәтип йәшәгән ауылға барып еткән һәм Хәтиптең өйөндә ҡунырға ҡалған. Өй хужаһы уларҙы, ғәҙәттәгесә, ҡунаҡсыл итеп, асыҡ йөҙ менән ҡаршы алған. Батша кешеләренә иң тәмле аҙыҡ әҙерләгән, иң таҙа түшәк йәйгән.

Иртән иртүк батша кешеләре был ерҙәргә ниндәй маҡсат менән килеүен һөйләп биргән. Хәтип уларға асыуланып:

- Ах, тәүҙә үк батшаның йомошо тураһында әйтһәгеҙ ни булған! Кисә һауа торошо насарайғас, Дөмәйҙән башҡа атты тапманыҡ. Һеҙҙе тейешенсә ҡунаҡ итергә теләп, ана шул иң яҡшы йылҡымды һуйып ашаттым, - ти.

Хәтиптең йомартлығы Бәйғәмбәребеҙҙең йомартлығына тиң. Ул да бит ҡасандыр ике кәзә һораусыға бөтә көтөүен бирeп ебәргән. Йомартлыҡтың әһәмиәте Бәйғәмбәребеҙҙең түбәндәге һүҙҙәрендә сағыла: "Йомарт кеше Аллаһҡа, кешеләргә, ожмахҡа яҡын һәм тамуҡтан йыраҡ булыр".

*ЗАУЫҠ*



# ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

**Фирүзә Абдуллина Баймаҡ районының Шүлкә ауылында ҙур ғаиләлә унынсы бала булып донъяға килә. Тәүге шиғырын өсөнсө класта уҡығанда 8 март байрамы алдынан әсәһенә бағышлап яҙа ул. Артабан да ҡәләм тирбәтеүен туктатмай. Ижад емештәре "Пионер" журналы, "Ленинсы" һәм район гәзиттәрендә донъя күреп тора. Баймаҡ интернат-мәктәбен тамамлағандан һуң, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтының филология факультетына уҡырға инә. Шул йылдарҙа буласаҡ тормош иптәше Фидаил Фәрәхетдин улы менән танышып, табышып, сәстәрен-сәскә бәйләп, ике ҡыҙ балаға ғүмер бирәләр.**

**Бөгөн Фирүзә Дәүләтша ҡыҙы Ҡырмыҫҡалы районының Иҫке Бәпес ауылында рус теле һәм әҙәбиәтенән уҡыта. Һүҙ ҡәҙерен, телебеҙ байлығын тәрән аңлаған, йөрәге ижад менән типкән, хис-тойғоға бай Фирүзә Абдуллинаның шиғырҙары ла күңелгә үтеп инеп, уның нескә ҡылдарын сиртә. Уның "Әсәйем һабаҡтары" тип аталған циклындағы шиғырҙары Герой-әсә - Йәмилә Ғәлим ҡыҙы Байтуринаға бағышлана. "Ҡәҙерлебеҙ бик тыныс, аҡыллы, киң күңелле, бала йәнле, итәғәтле кеше ине. Уның өйрәткәндәрен ҡулланып, мин бәхетле йәшәйем. Әсәйем биргән ошо һабаҡтарҙы гәзит уҡыусыларға ла еткергем килә", - ти Фирүзә Абдуллина.**

* * *

Әсәйемдең кәңәштәрен
Көн һайын ҡабатлайым:
"Ауыҙың тулы ҡан булһа ла,
Төкөрмә, балаҡайым..."

Түҙәм инде - төкөрмәйем,
Ауыҙым тулғанда ла,
Һиҙҙермәйем күңелемә
Бик ауыр булғанда ла.

Моңһоу йөҙөм дуҫтарымдың
Кәйефен төшөрмәһен,
Дошмандарым, усын ышҡып,
Шатлыҡтан иҫермәһен.

Маңлайыңа ни яҙылған -
Шуны күрәһең инде,
Башҡа саралар ҡалмағас,
Түҙгәс, түҙәһең инде.

Күтәрә алмаҫтай йөктө
Хоҙайым бирмәҫ әле,
Минең ҡайғырғанға ҡарап,
Кешеләр көлмәҫ әле.

Балаларыма өйрәтәм,
Көн аша ҡабатлайым:
"Ауыҙың тулы ҡан булһа ла,
Төкөрмә, балаҡайым..."

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**
**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



## БАЛАҢ ЙОҠЛАМАҺА... әрләшмәгеҙ

■ Калифорния генетиктары түбән калориялы алма сорты уйлап тапҡан. Алмағастың япраҡтарында барлыҡҡа килгән сорбитол һомғоллоҡ өсөн ҡурҡыныс булған фруктозаға әүерелә. Ғалимдар ошо процесты туктатып, сорбитол һәм емешеләк шәкәре аҙыраҡ булған алма килтереп сығарған. Был алмала 100 грамға 26 ккал ғына тура килә. Ә бының алманың түмәнә йогонто яһаймы, юҡмы икәнлеге тураһында хәбәр ителмәй.

■ Ғаиләлә ир менән ҡатын ни тиклем йышыраҡ талашһа, уларҙың балалары шул тиклем насарыраҡ йоҡлай, тип белдерә Америка ғалимдары. Үҙ-ара конфликтта булған ата-әсәнең балаһы тиҫтерҙәре менән бер үк ваҡытта йоҡларға ятһа ла, йоҡлап китә алмай яфалана, йә насар йоҡлай. Шуға ла улар көндөҙ бер туҡтауһыҙ йоҡолары килеүгә зарлана. Саҡ ҡына ла йоҡо туймау һөҙөмтәһендә иғтибарлылыҡ түбәнәйә, мейе мәғлүмәтте насар эшкәртә, уҡыуға теләк юғала, тиҙ ҡыҙыусанлыҡ барлыҡҡа килә, тип иҫкәртә табиптар.

■ Америка психологтары иҫәпләүенсә, бөгөнгө ҡыҙҙар өләсәләренә ҡарағанда ике йылға тиҙерәк өлгөрә. Уларҙың өлгөрөп етеүенең уртаса ваҡыты хәҙер 10 йәш тә 3 ай тирәһе. Ғалимдар бының бер нисә сәбәбен атай. Беренсенән, ҡыҙҙар хәҙер күпкә ҙурыраҡ көүҙәле. Енси өлгөрөп етеүҙе лептин тип аталған гормон стимулләштерә, ә ул май ҡатламында барлыҡҡа килә. Замана балалары юғары калориялы ризыҡты ла күп ашай, аҙыраҡ хәрәкәтләнә, май запасы күберәк булған һайын лептин кимәле лә юғарырыҡ. Икенсе сәбәп булып стресс тора. Әгәр ҙә өйҙә һәм мәктәптә ҡыҙ балаһы конфликттар уратып алған икән, унда боронғо эволюцион механизм хәрәкәткә килә. Уның буйынса, ҡыҙҙың генетик материалы нәҫелгә тиҙерәк тапшырылырға тейеш, шуға ла енси өлгөрөп етеү ҙә тиҙләнә.

■ Лондон университеты ғалимдары баш мейеһенең һандарҙы эшкәртеү менән генә шөғөлләнгән өлөшөн асыҡлаған. Был үҙенсәлекле "калькулятор"ҙы табырға һирәк ауырыу - дискалькулия менән сирләүселәр ярҙам иткән. Уларға ябай ғына һандарҙы ҡушырға ҡушҡандар һәм магнитлы-резонанс сканер ярҙамында "һүнгән" майҙанды тапҡандар. Ғалимдар әлеге ваҡытта был хәүефле булмаған, әммә шулай ҙа уңайһыҙлыҡтар тыуҙырған ауырыуҙы дауалау өсөн саралар уйлап табыу өҫтөндә эшләй.

■ Майндағы Франкфурт университеты ғалимдары раҫлауынса, һәр ситуацияла ла асыҡ йөҙ күрһәтергә мәжбүр булған кешеләр сәләмәтлеген хәүеф аҫтына ҡуя. Улар билдәләүенсә, һатыусылар, официанттар, менеджерҙар һәм хеҙмәт итеү өлкәһенә ҡараған башҡа һөнәр эйәләренең иммунитеты насарыраҡ була, улар хроник стресс һәм депрессия менән йышыраҡ яфалана. "Клиент һәр ваҡыт хаҡлы" ҡағиҙәһенең ошондай кире яғы бар, тип иҫкәртә ғалимдар.

■ Бөйөк Британия ғалимдары атеросклероздан яңы дарыу уйлап тапҡан. Ҡандағы холестерин күләмен түбәнәйтеүсе башҡа дарыуҙарҙан айырмалы рәүештә, яңыһы ҡан тамыры стенаһына ултырған ҡан төйөрҙәрен юҡҡа сығара. Ике йыл дауамында дарыу эсеү ҡандағы "насар" холестерин кимәлен яртылаш түбәнәйтә.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**"Һыу ағыр ҙа - таш ҡалыр, ир үлер ҙә - дан ҡалыр" тигән халҡым. Үҙҙәренең бөтә ғүмерен әҙәм балаларына тик изгелектәр эшләүгә генә бағышлап, халыҡ хәтерендә мәңгелеккә һаҡланып ҡалған иҫ китмәле кешеләр була. Үҙҙәре күптән инде мәңгелек йортҡа күскән булһалар ҙа, һәр ҡылған изге ғәмәлдәре халҡының иҫенә төшөп, телдән-телгә һөйләнеп, уларҙы үлемһеҙ итә. Һүҙем ана шундай аҫыл заттарҙың береһе Бөрйән районы Үрге Нөгөш ауылы муллаһы Уйылдан Мөхәмәҙиә улы Аҫылғужин тураһында булыр.**

# УЙЫЛДАН МУЛЛА



### Күреп беләбеҙ

Лира Яҡшыбаеваның дин әһелдәре тураһында яҙған китаптарын уҡып сыҡҡас: "Беҙҙең Уйылдан бабайыбыҙ ҙа шундай заттарҙан ине бит. Беҙ, бөрйәндәр, шундай ҙур шәхесте, дин әһелен, әүлиәне китаптан уҡып ҡына түгел, күреп тә беләбеҙ ҙә баһа. Ниндәй бәхетле кешеләр беҙ! Хатта күптәребеҙ уға дауаланырға ла йөрөнө", - тигән уй үтте башымдан. Уйылдан бабай 1899 йылда Бөрйән районының ожмахҡа тиң, иң гүзәл тәбиғәт мөйөшө - Үрге Нөгөш (Ямаш) ауылында донъяға килә. Атаһы Мөхәмәҙиә олатай бик абруйлы кеше була. Ул балаһының тырыш, зирәк булыуын күреп, Зәки Вәлидиҙең атаһы Әхмәтша хәҙрәттең мәҙрәсәһенә уҡырға ебәрә. Уҡыуын тамамлап, тыуған ауылына ҡайтҡас, Уйылдан бабай Мәксүт ауылы муллаһы Ҡыҙрасов Хәйретдин мулланың ҡыҙы Зәғифәгә өйләнә. Зәғифәнең атаһы менән әсәһе бик уҡымышлы, абруйлы кешеләрҙән һаналған, улар ҡыҙҙарына ла матур тәрбиә, дини белем биргән. Хәйретдин олатай кейәүҙәре Уйылданды ла бик күп һөнәрләргә өйрәткән. Уйылдан бабай менән Зәғифә инәй, кешеләрҙе дауалай-дауалай, бөтә ғәмгә өлгө булып, матур, татыу тормош юлы үтәләр. Сәмәрә, Зәйнәп исемле ҡыҙҙарға, Ишмөхәмәт, Рәсүл атлы улдарға ғүмер бирәләр. Нисәмә йылдар, иман - ул кешенең йөҙ аҡлығы ла, тормош күрке лә, икәнен халҡыбыҙ аңына һеңдерен тороусы, күңеле күлдәй киң, изгелекле табип - мулла, әүлиә, күрәҙәсе Уйылдан бабайыбыҙ 1982 йылдың 27 майында, үҙе тураһында һағынып һөйләрлек матур-матур иҫтәлектәр ҡалдырып, был донъяны ташлап китеп барҙы. Уйылдан бабай беҙҙең замандың юғары кимәлдәге дин әһелдәренең һуңғыны булғандыр, тип уйлайым, сөнки башҡа бер ерҙә лә, бер ваҡытта ла уның кеүек кешеләрҙе осратҡаным да, ишеткәнем дә булманы. Аллаһы Тәғәләнең зиһен иңләмәслек ҡөҙрәттәре күп. Күңеле саф, матур, әҙәм йәнле кешеләргә генә Хоҙай Тәғәлә шундай мөғжизәле, тылсымлы һәләттәр бирәләр. Ғәжәп итерлек бит: ундай дин әһелдәрен ниндәй остаздар уҡытты икән? Шундай шәкерттәр әҙерләгән остаздар үҙҙәре лә бөйөктәрҙән-бөйөк шәхестәр булғандарҙыр.

Минең яҙмаларымды уҡып, бәлки, Уйылдан мулланы күреп белгән, дауаланған кешеләр үҙҙәренең хәтирәләре менән уртаҡлашыр, тигән ниәттә, гәзит уҡыусыларға бабайыбыҙ тураһында үҙемдең һәм яҡташтарымдың иҫтәлектәрен тәҡдим итәм.

### Ҡустымды эпилепсиянан дауалағаны

Белорет педагогия училищеһын тамамлағас, минә Үрге Нөгөш башланғыс мәктәбендә балалар уҡытырға тура килде. Уйылдан бабайҙың өйө мин йәшәгән фатирҙан әллә ни йыраҡ түгел ине. Мулла бабай ныҡлы урта көүҙәле, бик итәғәтле, сабыр холоҡло кеше булып хәтеремдә ҡалған.

1965 йылдың яҙы ине. Игеҙәк ҡустым менән һеңлемдең кеше әүрәтерлек булып үҫеп килгән саҡтары. Кәшәләнән Күсәпов Басир бабайым килгән, беҙҙә ҡуна ятып бүрәнә ҡырҡа. Төнөн тороп, әләнән-әле атын ҡарап керә. Әсәйем:

- Ағай, йәш балалар янында төнөн елпенеп йөрөмә, ауырыу эйәртәһең бит,- тип, әллә нисә тапҡыр иҫкәртһә лә, донъя тәрәге атында булғас, сығып ҡарап йөрөмәйенсә лә булдыра алмағандыр инде бабайыбыҙ. Ул ваҡытта Уйылдан бабай ауылыбыҙҙа эпилепсия менән ауырыған бер еңгәне өшкөрөп дауалай ине. Әсәйем шуға ла Басир бабайҙың төнөн сығып йөрөүен өнәп еткермәгәндер инде. Ысынлап та, күп тә үтмәне, игеҙәк туғандарымдың береһе, ете айлыҡ Әхмәҙи ҡустым, көнөнә әллә нисә тапҡыр аңын юғалтып, тартышып ауырый башланы.

- Ҡайҙан ғына килеп эләкте был ауырыу. Затыбыҙҙа былайтып ауырыған кешеләр булғаны юҡ. Әйткәнемдә тыңламаның бит, ағай, әрәм генә булды инде балам, - тип, күҙ йәштәренә төйөлөп үпкәһен белдерҙе әсәйем Басир бабайға.

Балаң ауырығанда ғәзизенә ярҙам ҡулы һуҙа алмау, үҙеңде көсһөҙ тойоу - әсә өсөн иң әсе ғазаптарҙың береһелер. Әсәйемдең шул саҡтағы моңһоу күҙ ҡарашы бер ҙә онотолмай. "Тере ҡалһа ла, ярты кеше булыр инде был бала", - тип, үҙ алдына ауыз аралаш һөйләнгәнен ишетеп, йөрәгем әрней торғайны. Бер көндө Иҫке Собханғолдан врачтар килде, йәш балаларҙың һаулығын тикшереп йөрөйҙәр икән. Уларҙы күргәс, шул тиклем ҡыуандым, бына инде ҡустымды шәфәйтерҙәр, тип өмөтләндем. Әсәйем:

- Был баланың йөрәге ауырта бит, ентекләп ҡараһағыҙ ине, - тип үтенде.

Врачтар ҡустымдың йөрәген тыңлап ҡаранылар ҙа:

- Юҡ, был бала һап-һау, бер ниндәй ҙә ауырыуы юҡ,- тип, сығып киттеләр. Йөрәгемдә бәләкәй генә өмөт саҡтыһы ла һүнде, донъябыҙ емерелгәндәй булды. Әсәйем:

- Белмәйһегеҙ шул, - тине, өмөтһөҙләккә бирелеп.

Май айы ине. Мин - һеңлемдә, әсәйем ҡустымды күтәреп, йәйәүләп Ямашҡа, Уйылдан бабайға киттек. Өйөнөң эсе туп-тулы кеше булһа ла, Уйылдан бабай менән Зәғифә инәй беҙҙе ихлас ҡаршы алды. Әсәйем менән ҡустымды үҙҙәрендә ҡалдырҙылар, һеңләнә ауырыу һуғылыр, тип, минә уны туғандарҙың берәйһенә алып барып торорға ҡуштылар. Зөлфиә ныһыуымды күтәреп, Вафир ағайымдарға барҙым. Уйылдан бабай ҡустымды тәрбиәләгәнсе, өс-дүрт көн тирәһе, уларҙа йәшәп торҙоҡ. Ул ағайым менән Гөлниса еңгәгә әле лә ҙур рәхмәтлемен.

- Артығыҙға боролоп ҡарамағыҙ, ауырыу эйәрмәһен, килгән юлығыҙҙан түгел, икенсе юлдан ҡайтығыҙ. Йоҡлар алдынан ишек- тәҙрә, мөрйәләрегеҙҙе "Бисмиллаһир - рахмәәнир - рахиим" тип, ныҡ итеп ябығыҙ. Бер нәмәнән дә ҡурҡмағыҙ, - тине Уйылдан бабай беҙ ҡайтып китер алдынан.

Беҙ шулай эшләнек тә инде. Әсәйем йоҡлар алдынан, мулла ҡушҡанса, ишек-тәҙрәләрҙе, мөрйәләрҙе ябып ҡуйҙы. Тышта ҡурҡыныс, ямаҡай итеп бесәй мыяулаған тауыштар ишетелде. Өйгә ҡайтҡас, ҡустым бер генә тапҡыр ауырыны ла, башҡаса ауырыманы.

Ҡустымды тәрбиәләгәндә һәр иртә һайын бабай әсәйемдән:

- Йә, балдыҙ, бөгөн төшөңдә нимәләр күрҙең? - тип һораған. Әсәйем төш һөйләгәндә бабай иғтибар менән тыңлап ултырған. Әсә менән баланың организмы бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән шул. Баланың ауырыуы ни кимәлдә икәнен әсәйемдең төштәренә ҡарап билдәләгән ул.

Борон-борондан ололар йәш балаларҙы яман күҙҙәрҙән, төрлө ауырыуҙарҙан һаҡларға тырышҡан. Ҡырҡы тулмайынса баланы сит кешеләргә күрһәтмәгәндәр, ишектән килеп инеү менән өҫ кейемен һалмайынса, елпенгәндән, сәңгелдәк янына барыу тыйылған. "Ҡыҙыл әнерҙә балаларҙы урамға сығармағыҙ. Сыҡһалар ҙа, яланбаш йөрөмәһендәр, баштарына кейһендәр. Сабып килгән атҡа, көтөүҙән ҡайтып килгән малдарға, хатта өйгә килеп кергән кешегә лә сабый бала ҡаршы йүгермәһен", - тип әйтер ине ололар.

Ибн Ҡайим Аль - Джаузияның "Пророческая медицина" тигән китабын уҡып сыҡҡайным. Ул эпилепсия тураһында бына нимәләр тип яҙған: "Эпилепсия (падучая) бывает двух видов: вызванная злыми духами и вызванная физическими причинами (химический и физиологический дисбаланс). Современные врачи чаще имеют дело со вторым видом, объясняют причины его возникновения и предлагают соответствующие методы лечения. Что касается эпилепсии, вызванной злыми духами, то наиболее прогрессивные и разумно мыслящие из современных врачей признают ее существование. И они подтверждают, что лечение такого вида эпилепсии проводят праведные люди с развитым уровнем сознания, которые могут нейтрализовать негативное воздействие потусторонних сил".

Ошо юлдарҙы уҡығандан һуң, Уйылдан бабайҙың ниндәй көс-ҡеүәткә, ҡөҙрәткә эйә булыуы аңлашыла ла инде.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**
**(Дауамы бар).**

*ҠОТЛАУ ҺҮҘЕ*

# УРАҘА ҒӘЙЕТЕ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!



Бисмилләһиррахмәниррахим!

Рамаҙан айы тамамланып, бөтә донъя мосолмандары шатлыҡ һәм ҡыуаныс, ҙур өмөттәр менән Ураҙа ғәйетенә лә килеп етте. Иманлы бәндәләр бер ай дауамында Аллаһ Раббүл ғаләмин хәҙрәттәре фарыз иткән ураҙа ғибәҙәтен үтәне һәм ислам диненең бер ғәмәлен атҡарҙы.

Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә бер хәҙис ҡотдусиҙә: "Ураҙа ғибәҙәте фәҡәт минең өсөн ҡылынған ғибәҙәт, әжерен дә, сауабын да Үҙем генә бирәм",- тине. Ураҙа ул - бөтөн мосолмандарға ебәрелгән Рамаҙан мәҙрәсәһе. Ошо мәҙрәсәлә беҙ бер ай дауамында ғилем алдыҡ, камиллаштыҡ, үҫтек.

Иң беренсе ғилем - телебеҙҙе тыйырға өйрәндек. Сөнки Бәйғәмбәребеҙ бер хәҙисендә: "Кем дә кем ураҙала булып та ялған һүҙҙән, ялған эштән тыйылмаһа, Аллаһ Тәғәләнең уның ас йөрөүендә мохтажлығы юҡ", - тине. Һәр беребеҙ телебеҙҙе үлсәп һөйләргә, һүҙҙе яҡшыға бороорға, тәрбиәләргә, мөләйем һүҙҙәр генә ҡулланырға тырышты.

Икенсе ғилемебеҙ - Рамаҙан айында ризыҡтың ҡәҙерен белергә өйрәндек. Сөнки башҡа ваҡытта ризыҡты теләгән бер ваҡытта ҡулланған булһаҡ, Рамаҙан айында фәҡәт сәхәр һәм ифтар ваҡыттарында ғына ризыҡландыҡ. Һәм Аллаһы Тәғәләгә: "Эй, Раббым, беҙгә ошо ураҙаны, ас йөрөүҙе фәҡәт Рамаҙан айында ғына насип итһәң ине. Башҡа ваҡытта ризыҡтарың киң булһын", - тип доға ҡылдыҡ. Сөнки бөгөнгө көндә донъяның һәр бер өлөшөндә әллә күпме кеше аслыҡтан һәләк булғанын ишетә йөрөйбөҙ.

Рамаҙан айы - ул иманыбыҙға ҡеүәт өҫтәй торған ай. Башҡа ваҡыттарға ҡарағанда, мәсеттәргә йышыраҡ килдек, төндәрен тәрәүихтәргә йыйылдыҡ, Ҡөрьән Кәримебеҙҙе йышыраҡ уҡыныҡ һәм ишеттек, ул беҙҙең күңелебеҙҙе таҙаланы, һәр беребеҙ үҙ өҫтөндә эшләне һәм, Аллаға шөкөр, Рамаҙан мәҙрәсәһен уңышлы үттек, иншаллаһ.

Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә хәҙрәттәре ошо айҙа алған тәрбиәне киләһе Рамаҙанға тиклем дауам итергә ҡеүәт бирһен. Илебеҙгә, Башҡортостаныбыҙға тыныслыҡ, уның рухи, иҡтисади кимәле күтәрелеүен насип ҡылһын. Ғаиләләребеҙгә тигеҙ мөхәббәт, ошо мөхәббәттең емеше булған иманлы сабыйҙар; ғилем биреүселәребеҙгә хәйерле ижтиһад менән үҫеп килгән быуынды ғилем һәм мәғрифәткә күндереү юлдарын асһын. Йорттарыбыҙға бәрәкәт бирһен, хәләл ризыҡ табыу әмәлдәрен һәм хәрәмдән тыйылыуҙы, тапҡан малыбыҙҙы хәйерле ҡулланыуҙы насип итһен. Рамаҙан ғәйете мөбәрәк булһын, Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә үҙ рәхмәтен дауамлы ҡылһын. Әссәләмү ғәләйкүм үә рахмәтүллаһи үә бәрәкәтүһ.

**Нурмөхәмәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН,**
**мөфтөй, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесе.**

*ЙӘН ӘРНЕҮЕ*

# КЕШЕ ҒҮМЕРЕ...

## Аллаһы Тәғәлә тарафынан һаҡлауға бирелгән аманат

**Әҙәм балаһының үҙ-үҙенә ҡул һалыу темаһына башҡа бер ҡасан да әйләнеп ҡайтмаясаҡмын, был хаҡта яҙмаясаҡмын, тигән уйҙар баштан меңәрләгән мәртәбә үтһә лә, булмай. Сөнки суицид ҡылыусыларҙың күбәйеүен тыныс ҡына күҙәтеү, "Нимә эшләйһегеҙ һеҙ, аңығыҙға килегеҙ!", тип оран һалыуҙан туҡтау мөмкин түгел бит.**

Ниндәй сәбәптәр этәрә кешеләрҙе үҙ-үҙенә ҡул һалыу кеүек ҡурҡыныс аҙымға? Хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре ҡайһы бер кешеләрҙең оҙайлы эсеүҙән һуң үҙ хәләтенә ҡайта алмауын, йәштәрҙең бәхетһеҙ мөхәббәт ғазабын күтәрмәүен, үҫмерҙәрҙең ата-әсәһе менән уртаҡ тел тапмауын сәбәп итеп ҡуя. Шулай уҡ, имтиханда алған насар билдә, тиҫтерҙәре тарафынан кәмһетелеү кисереү ҙә балаларҙы ошо упҡынға этәрә.

Һуңғы йылдарҙа үҫмерҙәрҙең, йәш быуындың, хатта кескәйҙәрҙең интернет селтәре менән артыҡ мауығыуы хафаға һала. Виртуаль тормошта йәшәүселәр ниндәй сайтта ғына ултырмай! Улар араһында үҙ-үҙен үлтерергә теләүселәргә "кәңәштәр" биргәндәре лә бар. Интернет селтәре даими тикшерелеп, хәүефле сайттар ябыла. Тик ул оҙаҡламай икенсе исем аҫтында асыла, уларҙың барыһын да ябып бөтөп өлгөрөп тә булмайҙыр, күрәһең. Әлбиттә, был йәһәттән бар яуаплылыҡ ата-әсә өҫтөнә һалына. Йәш әсәләрҙең кескәйҙәрҙе компьютер артына оҙайлы ваҡытҡа ултыртып ҡуйыуы бөтөнләй аңлашылмай. Бала компьютер менән эш итә белергә тейеш - бәхәсһеҙ. Әммә был уның виртуаль донъяла йәшәргә тейеш икәнен аңлатмай бит. Баланың бер урында ҡатып, тыныс ҡына тик ултырыуы ата-әсә өсөн уңайлылыр, бәлки. Уны урамға саф һауа һуларға алып сығырға, китаптар уҡырға, уның менән төрлө уйындар уйнап мәшәҡәтләнергә кәрәкмәй.

Минеңсә, беҙ ошо компьютер арҡаһында бер быуын балаларҙы юғалттыҡ инде. Иғтибар иткәнегеҙ бармы, беҙҙән ситтә йәшәгән күпселек студент балаларыбыҙ интернет селтәрендә таңға тиклем ултыра. Уның лекцияларҙа йоҡлап ултырасағы йәки уҡыу йортона бөтөнләй бармаясағы көн кеүек асыҡ. Бар ғәйеп ата-әсәләрҙә: компьютер артында минутлап, ярты сәғәтләп кенә ултырыуҙы ҡандарына һеңдермәгәнбеҙ. Йоҡоһо даими рәүештә туймаған кешеләрҙең психикаһы боҙолоуын аңлау өсөн табип булырға ла кәрәкмәй. Шуға күрә үҙ-үҙенә ҡул һалыу сәбәптәренең береһе - кешенең виртуаль донъяға алданып, ысын тормошто ҡабул итә белмәүелер, тип уйлайым. 14 йәшлек үҫмерҙең: "Их, ошо компьютер эсендә генә йәшәргә кәрәк ине! Бәләкәс кенә кешегә әүерелергә ине!" -тигән һүҙҙәре шуның асыҡ дәлиле. Балалар ата-әсәһе, дуҫтары менән аралашыуҙан, тыуған йортонан баш тартып, виртуаль донъяға күсергә әҙер.

Суицидтар һаны артыуға борсолоуын белдереп, районыбыҙҙың имам-хатиптары үҙ-үҙенә ҡул һалған кешеләрҙе дөйөм зыяраттан ситтә, айырым ерләү мәсьәләһен дә күтәреп сыҡҡайны. Был ҙур ғына шау-шыу тыуҙырҙы, кемдер был фекерҙе яҡлаһа, икенселәр ҡаршы сыҡты. Ысынлап та, йөрәктәргә мәңгелек эҙ һалған проблеманы хәл итеү юлдарын табыуы бик ауыр. Шуға күрә имам-хатиптар халыҡты дин менән тәрбиәләргә саҡыра.

Эйе, ислам тәрбиәһе мосолмандан юлындағы һынауҙарҙы лайыҡлы үтеп сығыуҙы талап итә. Иңеңә ауырлыҡ төшкәндә йәки өмөттәрең юҡҡа сыҡҡанда, тормоштан ваз кисергә ярамай. Мосолмандың тормош ауырлыҡтарын үтергә ярҙам итеүсе һынатмаҫ ҡоралы һәм бөтмәҫ кәрәк-ярағы бар. Ҡоралы - ҡаҡшамаҫ иманы, кәрәк-ярағы - күтәренке рухы. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм үҙ-үҙеңде үлтереү кеүек имәнес енәйәт ҡылған һәр йәндең ожмахта Аллаһы рәхмәтен юғалтасағы, тамуҡта Аллаһы асыуына дусар буласағы тураһында иҫкәртә килгән. Уның хәҙисендә: "Һеҙ булмаған осорҙа бер кеше һуғышта ҡаты яралана. Һыҙланыуға түҙмәй, хәнйәр менән тамырҙарын ҡырҡа һәм күп ҡан юғалтыуҙан үлә. Был хаҡта Аллаһы Тәғәлә шулай тип әйтә: "Минең ҡолом ғүмерен өҙөргә ашығып, үҙен ожмахтан мәхрүм итте". Һыҙланыуҙан ҡасып, үҙен үлтергән кеше ожмахтан мәхрүм булған икән, сауҙаһы алға бармаған, имтихан тапшыра алмаған йәки һөйгәне ташлаған өсөн йәнен ҡыйыусылар тураһында ни әйтербеҙ? Төрлө һынау алдында баҙап ҡалыусылар, бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләмдең түбәндәге хәҙисенә ҡолаҡ һалығыҙ: "Кем ҡаянан ташланып, үҙ-үҙен үлтерә, шул мәңге тамуҡта ғазап сигер. Кем ағыу эсеп, үҙ-үҙен үлтерә, шул мәңге ҡулында ыу тотоп, үҙен ғазаплар".

Дин әһелдәре был хаҡта: "Үҙ-үҙеңә ҡул һалыу кешелеккә зыян килтереүгә тиң, сөнки был осраҡта ла әҙәм балаһының ғүмере ҡыйыла. Ғүмер - кешенең шәхси милке түгел, ә Аллаһы Тәғәлә тарафынан һаҡлауға бирелгән бер аманат. Берәү ҙә үҙен барлыҡҡа килтермәгән, берәй ағзаһын йәки күҙәнәген булһа ла бар итмәгән. Шуға күрә, бер кемгә лә уларҙы юҡҡа сығарыу хоҡуғы бирелмәгән. Уны ҡыҫҡартырға, зарарларға ла ярамай. Был хоҡуҡ бар ғаләмде бар иткән Аллаһы Тәғәләгә генә бирелгән", - ти.

Эйе, суицид - алдынғы технологиялары менән дан алған заманыбыҙҙың ҡурҡыныс ысынбарлығына әүерелде. Шуға күрә, бер-беребеҙгә иғтибарлы булайыҡ, кешеләрҙе нахаҡҡа рәнйетмәйек, тормош ауырлыҡтарына ҡаршы тора алған балалар тәрбиәләйек. Йәшәйешебеҙҙең матур яҡтарын, ҡабатланмаҫ мизгелдәрен күрергә-күрһәтергә өйрәнһәк, үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар ҙа булмаҫ ине.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

## Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

**Ыңғай көйләнеш: әгәр нимәнелер эшләй алыуығыҙға ныҡлы инанһағыҙ, мотлаҡ эшләйәсәкһегеҙ.**

**Минең быуынымдың бөйөк асышы шунда: кешеләр психологик көйләнешен үҙгәртеп, тормошон үҙгәртә ала.**

**Уильям Джемс, психолог.**

**Уңышлы кеше - үҙенә ташланған кирбестәрҙән ныҡлы нигеҙ һалыусы.**

**Дэвид Бринклин, тележурналист.**

Lafe журналы уны үҙ быуатының беренсе кешеһе тип атай. Ул үҙ ғүмерендә 1093 яңы нәмә уйлап таба. Донъяла уның кеүек патентҡа эйә берәү ҙә юҡ. 65 йыл дауамында ул йыл һайын АҠШ-тың патенттар бюроһына кәм тигәндә бер ғариза бирә. Ул уҡ хәҙерге фәнни-тикшеренеү лабораторияһына нигеҙ һала. Ул - Томас Эдисон.

Күптәр Эдисондың һәләтлелеген һәм иҫ киткес һөҙөмтәләрен уның даһилығы, эшсәнлеге менән аңлата. "Гений, - ти Эдисон, - ул 99 процент тир һәм 1 процент илһам". Бөйөк эҙләп табыусының уңышы - ыңғай психологик көйләнеш һөҙөмтәһе. Эдисон оптимист кеше була һәм һәр нәмәнең ыңғай яғын күрә. Электр лампочкаһына яраҡлы материал табыу өсөн уға 10 мең тапҡыр уңышһыҙлыҡ кисерергә тура килә. Әммә ул быны уңышһыҙлыҡ тип түгел, маҡсатына яҡынайтҡан тағы бер аҙым, тип ҡарай. Ул бер ваҡытта ла маҡсатына өлгәшеүҙә шикләнмәй. Уның үҙ-үҙенә ышаныһын түбәндәгесә аңлатырға мөмкин: "Тормошта уңышһыҙлыҡҡа осраған күпселек - башлаған эшенә ҡул һелтәп ҡуйғанда уңышҡа ни тиклем яҡын тороуҙарын аңламаусылар".

Әгәр теләһә ниндәй өлкәлә уңыш ҡаҙаныусыларҙың биографияһына иғтибар итһәгеҙ, улар һәр ваҡыт тормошҡа ыңғай күҙлектән ҡарай.

Йоғонтоло лидер булырға теләһәгеҙ, ыңғайға көйләнеш алығыҙ. Ул шәхес булараҡ һеҙҙең ҡәнәғәтләнеү кимәлен генә билдәләп ҡалмай, шулай уҡ башҡаларҙың һеҙгә булған мөнәсәбәтенә лә йоғонто яһай. Ыңғай көйләнешле кеше булыуҙың нимә икәнлеген яҡшыраҡ аңлау өсөн түбәндәге кәңәштәргә ҡолаҡ һалығыҙ:

**1. Һеҙҙең көйләнеш - шәхси һайлауығыҙ ул**

Кеше уны кемдер ҡаһарманлыҡҡа илһамландырыр тип көтә. Үҙенең фекерләү кимәлен үҙ өлөшөнә төшкән яҙмышҡа һылталай. Әммә был донъяла нимә алдараҡ барлыҡҡа килә: психологик көйләнешме, әллә шарттармы? Ысынлап уйлағанда, кем алдараҡ барлыҡҡа килгән, йомортҡамы, тауыҡмы, тигән кеүек. Тик хәҡиҡәт уларҙың ҡайһыһы алданыраҡ барлыҡҡа килеүендә түгел. Кисәгегә тиклем һеҙҙең менән нимә булыуға ҡарамаҫтан, һеҙҙең көйләнеш - ул бөгөнгө һайлау.

Психолог Виктор Франкл: "Кеше азатлығының иң һуңғыһы булып теләһә ниндәй шарттарҙа ла үҙеңә психологик көйләүҙе һайлау тора", - тигән. Нацистик лагерҙа үлем менән күҙгә-күҙ осрашҡанда ла үҙендә ыңғай көйләнеш һаҡлап ҡала алған кеше булараҡ, ул был раҫлауҙың асылын яҡшы аңлаған. Әгәр ул, ауыр һынауҙарға ҡарамаҫтан, үҙендә ыңғай көйләнеш һаҡлай алған икән, һеҙ быны бик еңел эшләйәсәкһегеҙ.



### 28 ИЮЛЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.15 "Жить здорово!" (12+).
10.20 "Модный приговор".
11.15 "Ураза-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.00 "Ясмин". Сериал (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 "Ясмин" (16+).
16.10 "За и против" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Личная жизнь следователя Савельева". Детективный сериал. 1-я и 2-я серии (16+).
23.30 "Группа "Альфа". Люди специального назначения" (12+).
00.35"Елизавета". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.05 "В наше время" (12+).
04.00 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Советский Архимандрит". К 100-летию со дня рождения архимандрита Алипия (Воронова).
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 Праздник Ураза-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
